*Сит халыҡтар араһына сығып киткән кешеләрҙең үҙ Рух ҡоштары менән күңел нурҙарының бәйләнеше бик ныҡ бушай. Шуға ла улар сит ерҙәрҙә йәшәгәндә йөрәктәрендә ниндәйҙер бушлыҡ һәм үҙәк өҙгөс һағыш тоя. Йырҙарын һағынамы, тыуып-үҫкән ерҙәренме, туғандарынмы - үҙҙәре лә белмәй һәм аңламай. Ә һағыштың төп сәбәбе - үҙ халҡының Рух ҡошо менән күңел бәйләнешенең өҙөлөүе.*
*Илгизәр ДИҠҠӘТ.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 йыл

24 - 30 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№47 (517)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Милләтте Конституция яҡлай,**

йәки Милли ҡуҙға өрөп, сәйәси мәрәй йыймаҡсылармы?



3

**Тарих - күҙәтеүсе...**

һәм ул үҙен белмәгәндәрҙе ҡаты яҙалай



6

**Фото төшөрөү - диалог,**

ижади эшмәкәрлек һәм мауыҡтырғыс шөғөл



8-9

**Ауырыу аяҡтан йыға...**

ә өмөт аяҡҡа баҫтыра



12-13

14 ТВ-программа

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампаниһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тоторо̄ҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**



● Шулай итеп, 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә** яҙылырға була. Ноябрҙә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыға - **"Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ туй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы** ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигe юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **240 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# БАРЛЫҒЫБЫҘҘЫ БЕЛДЕРӘЙЕК

**"Киске Өфө" гәзите кеүек баҫманы күптән көтә инек. "Ватандаш" журналы сыға башлағас, рухи һыуһыныбыҙ ҡанып ҡалғайны. Бына шул рухи һыуһынды хәҙер "Киске Өфө"нө уҡып ҡандырабыҙ. Берҙән-бер теләгем: ошо йүнәлештән тайпыла күрмәгеҙ. Халҡыбыҙҙы үҙ асылына ҡайтарырға, тарихи булмышын иҫенә төшөрөргә, үҙ милләте, тамырҙары менән ғорурланырға өйрәтергә тейеш был баҫма. Үҙенең кемлеген белеп, тарихи хәтере уянһа, улдарыбыҙ, ҡыҙҙарыбыҙ үҙ алдына маҡсат ҡуйырға өйрәнәсәк, үҙенән-үҙе бөгөнгө заман ҡатмарлыҡтарын йырып, алға барасаҡ.**

Ә әлегә халҡыбыҙ битарафлыҡ йоҡоһонда. Зарланмайым, унан файҙа юҡ. Ә һәр бер милләттәшем менән ошо темаға һөйләшергә тырышам. "Башҡортса гәзит-журналдар алдыраһыңмы?"- тигән һорауҙан башлайым. Күптәр әлегә "Киске Өфө" гәзите барлығын белеп тә бөтмәй. Белгәндәр уға баш көллө ғашиҡ булырға өлгөрҙө. Бер әхирәтем менән гәзиттең һәр һаны тураһында фекер алышырға ғәҙәтләнеп киттек.

"Киске Өфө"нө Өфөлә йәшәгән һәр башҡорт ғаиләһе яҙҙырһын ине. Бының менән беҙ үҙебеҙҙең барлыҡты белгертәбеҙ, үҙебеҙҙең абруйҙы арттырабыҙ. Юҡһа, Өфөлә башҡорттар юҡ, ти ҙә ҡалалар. Бар улар, тик үҙ туған телендә уҡырға, балаларын уҡытырға ҡыйынһынып ятыусылар күп улар араһында. Былай итеп нимәгә ирешәбеҙ? Барыбер урыҫ булып китеп булмай, барыбер һине башҡорт тиҙәр. Балаларҙы ла үҙебеҙҙең маңҡортлоҡ яҙмышына дусар итмәһәк ине инде. "Киске Өфө" күптәрҙең күҙен асты, бынаһына иманым кимил. Шуға ла һәр башҡорт ғаиләһе уны үҙ гәзите тип ҡабул итһен, уның тиражын 20, 30 меңгә еткереү өсөн тырышһын ине. Был да аҙ әле. Сөнки бөгөн Өфөлә кәмендә 200 меңләп башҡорт йәшәй. Уларҙың яртыһы ғына туған телдә уҡый тип алһаҡ та, "Киске Өфө"нөң тиражы 50 меңгә етергә тейеш. Әйҙәгеҙ, милләттәштәр, ошо баҫманың тиражы аша үҙ тауышыбыҙҙы башҡаларға ишеттерәйек.

**Камилә ЯЙЫҠБАЕВА,**
**пенсиялағы уҡытыусы.**

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН




# ЧУПАКАБРАМЫ?

## Башҡортса бэктс була ул

**Ышанмаҫ ерҙән ышанырһың был хәбәргә. Былтыр 22 ноябрҙә Тәтешле районының Күрҙем ауылы кешеләренең һарыҡтарын ҡырып һалған чупакабра Баймаҡ районына ла барып еткән икән. Ышанмаһағыҙ, билдәһеҙ йыртҡыс йәнлектең ошо райондың Байым, Сәйғәфәр ауылында йәшәгән бер нисә кешенең һарыҡтарын тамаҡлауы хаҡында сюжет эшләп күрһәткән Башҡортостан юлдаш телевидениеһы хәбәрселәренән һорашығыҙ…**

Йәнлектең фәҡәт чупакабра икәнлегенә етди дәлил: ул фәҡәт кәзәләргә, улар булмағанда, һарыҡтарға ғына йоғона. Ни өсөн тигәндә, үткән быуаттың 50-се йылдарында Мексиканың Пуэрто-Рико ҡалаһында тәүге тапҡыр пәйҙә булыусы был йәнлек фәҡәт кәзәләргә һәм һарыҡтарға йоғонғаны өсөн чупакабра атамаһы ала ла инде. Испан теленән "чупа"- имеүсе, ә "кабра" - кәзәне аңлата. Чупакабра һүҙе беҙҙеңсәгә тәржемә иткәндә - "кәзә имеүсе", дөрөҫөрәге, "кәзәнең ҡанын һурыусы"ны аңлата. Бына шуның өсөн дә Тәтешлелә һәм Баймаҡта һарыҡтарҙы ҡырып һалыусы йыртҡысты тап чупакабранан күрәләр ҙә инде.

50-се йылдарҙа Мексикала һәм АҠШ-та чупакабраларға ҡаршы һуғыш иғлан ителә һәм шуның һөҙөмтәһендә улар теүәл егерме йылға юғалып тора. Ә инде 70-се йылдарҙа Европала, тағы ла егерме йылдан Рәсәйҙә һәм бына тағы ла егерме йыл үткәс, беҙгә лә килеп еттеләр.

Кемдәр йәки нимәләр һуң улар чупакабралар? Күптәр уларҙың фәҡәт башҡорт ерлегендә пәйҙә булыуын Убыр атлы мифик образ менән бәйләй. Кемдер уны - бүре, кемдер - ҡарһаҡ, кемдер - төлкө, кемдер -эйәһеҙ эт, кемдер суҫҡа, ти. Бәлки, шулайҙыр, әммә уларҙың тамаҡлаған һарыҡ-кәзәләрҙең семтем итен дә ҡапмауын нисек аңлатырға була һуң, улай булғас?

Ә бына Өфөнөң ДОК микрорайонында пәйҙә булған чупакабралар "Ҡарағайлыҡтар" тигән баҡсасылар ҡасабаһында һис көтөлмәгәнсә ҡуяндарға һөжүм иткән һәм шул уҡ ваҡытта тауыҡтарға теймәгән. Ҡуяндарҙы тамаҡлаусы, Тәтешлеләге һәм Баймаҡтағы кеүек, "ҡултамға" ҡалдырған һәм һәлпеш ҡолаҡтың семтем итен дә ҡапмаған. Әллә былары чупакабраның чупаҡуян тигән берәр төрөмө икән?

Халыҡта "Үҙе юҡтың, күҙе юҡ" тигән һүҙ бар. Шуның кеүек, беҙ ул заттарҙы үҙ күҙебеҙ менән күрмәгәс, тотоп ҡарамағас, бер ни тип тә әйтә алмайбыҙ. Шулай ҙа хәҙерге глобалләшеү шарттарында йәнлектәр араһында ла шундай уҡ ҡатнаш ҡарығышыуҙар күпләп башланып, был чупакабралар, тием, бүреләрҙең, эттәрҙең, ҡарһаҡтарҙың, төлкөләрҙең һәм сусҡаларҙың ҡандары ҡушылыуҙан барлыҡҡа килгән берәр бэктс тигән берәр затмы? Тегеләр яңылыша, тимәк, чупакабра башҡортса бэктс була.

**Әмир ҒҮМӘРОВ фараз итте.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҠАСЫП КИТҺӘҢ ДӘ...

## сәсеп кит…

**Ғәҙәти эш көнө. Телефон шылтырағас, яуап бирергә булдым. Шылтыратыусы хәл-әхүәл белешкәс: "Киске Өфө"гә декабрҙең 25-ендә яҙылып буламы икән?" - тигән һорауын бирҙе. Гәзитебеҙгә яҙылырға бер ҡасан да һуң түгеллеген аңлатып, уның ҡайһы бер шарттары менән таныштырғас, әңгәмәсем: "Мин былай йыл һайын яҙылам ул…" - тип өҫтәне. "Йыл һайын яҙылғас, баҫмабыҙға алданыраҡ, мәҫәлән, ноябрҙә яҙылып ҡуйырға нимә ҡамасаулай һуң? Ниңә йыл һуңына тиклем һуҙып йөрөргә?" - тип һорамай түҙмәнем. Трубканың теге осонан ишетелгән яуап бер аҙ шаңҡытты: "Әгәр 21 декабрҙә ахырызаман булып, донъя бөтһә… Мин бит пенсионер, аҡса бушҡа әрәм була…" Ирекһеҙҙән, көлөп ебәрҙем: "Әгәр ахырызаман була икән, ул аҡса һеҙгә нимәгә кәрәк?"**



Һөйләшеү уйынлы-ысынлы тамамланһа ла, бөгөн мәсьәләнең, ысынлап та, етди икәнлеге төҫмөрләнә: күптәр ахырызаманға "әҙерләнә". Ә бит Аллаһы Тәғәлә бәндә нимә һорай, шуны бирә. Ахырызаманға әҙерләнгәндәр өсөн был дата ғүмеренең һуңы булып ҡуйыуы ла мөмкин бит. Ә кемдер был хаҡта уйламай, тормошон ғәҙәтенсә дауам итә, көндәлек мәшәҡәттәр менән мәшғүл, теге хәбәрҙәрҙе сираттағы уйҙырма итеп кенә ҡабул итә.

Ирекһеҙҙән шундай лаҡап хәтергә килә: бер заман оло йәштәге әсәһе менән ҡыҙы яҙғыһын иген дә, картуф та, йәшелсә-емеш тә сәсмәгән. Әсәһе: "Нимәгә ыҙалап сәсеп торорға, быйыл барыбер үләм", - тигән. Ә ҡыҙы иһә: "Нимәгә баш ватырға, мин быйыл кейәүгә сығып, иремдең йортона китәм", - тигән. Һөҙөмтәлә әсә үлмәгән, ҡыҙ кейәүгә сыға алмаған...

Бөгөнгә ысынбарлыҡҡа урап ҡайтып, бөтөн ғәм алдына шундай һорау ҡуйығы килә: ә ахырызаман булмаһа? Бына ҡасан кәрәк ул халыҡтың "Ҡасып китһәң дә, сәсеп кит" тигән аҡылы...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ТУКТА, МӘЛ!

# ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН...



Өфө ҡалаһы Киров районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова журналистар менән матбуғат конференцияһында социаль етемлек мәсьәләһе айырыуса киҫкен тороуы тураһында белдерҙе. Вице-премьер һүҙҙәренсә, республикала 18 мең етем баланың 90 проценты - социаль етемдәр. Интернат учреждениеһында бер баланы тәрбиәләү дәүләткә ете тапҡырға ҡиммәтерәккә төшә. Бер сабыйға йылына балалар йорто 300-350 мең һум аҡса тотона.

✓Вице-премьер Лилиә Ғүмәрова менән осрашыуҙа пособиелар темаһы ла иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Билдәләнеүенсә, 2013 йылдың 1 ғинуарынан льготаларҙың күпселек өлөшө монетизациялана. Шулай итеп, мәҫәлән, күп балалы ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балалар физкультура-сәләмәтләндереү клубтарына йөрөү урынына аҡса аласаҡ. Шулай уҡ пособиеларҙың күләме лә арттырыласаҡ. Бынан тыш, алдағы йылдың 1 ғинуарынан йән башына уртаса килеме йәшәү минимумынан, йәғни 5600 һумдан, кәмерәк булған күп балалы ғаиләләр 1,5-3 йәштәрҙәге һәр балаға өс мең һум күләмендә өҫтәмә пособие аласаҡ.

✓Башҡортостанға инвестициялар йәлеп итеү күләме быйыл үткән йыл менән сағыштырғанда күпкә артығыраҡ. Федераль дәүләт статистика хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса Территориаль органы (Башҡортостанстат) мәғлүмәттәре буйынса, 2012 йылдың ғинуар-сентябрь айҙарында бөтә төр финанслау сығанаҡтары иҫәбенә төп капиталға инвестициялар күләме 146,9 миллиард һум тәшкил иткән, 2011 йылдың тәүге туғыҙ айы менән сағыштырғанда был яҡынса 20 процентҡа күберәк. Әлеге күрһәткес буйынса республика Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында өсөнсө урын биләй.

✓Башҡортостандың өс юғары уҡыу йорто илдең иң көслө 100 вузы иҫәбенә инде. Рейтингты "Эксперт РА" агентлығы төҙөгән. Өфө дәүләт нефть техник университеты исемлектә - 49-сы, Башҡорт дәүләт университеты - 83-сө, Өфө дәүләт авиация техник университеты 88-се урындарҙы биләй. М.В.Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты, Н.Э.Бауман исемендәге Мәскәү дәүләт техник университеты, Санкт-Петербург дәүләт университеты, Мәскәү физика-техник институты һәм Юғары иҡтисад мәктәбе - әлеге рейтингта лидерҙар иҫәбендә.

БОРСОУЛЫ ХӘЛ

**Медиктар сирҙәрҙең йыл миҙгелдәренә ҡарап көсәйеүен билдәләй. Шулай ҙа айырым сирҙәрҙең көҙгөһөн ҡатмарлашыуы ла бер кемгә лә сер түгел. Был йәһәттән бигерәк тә көҙ айырылып тора. Шуныһы иғтибарға лайыҡ, айырым сирҙәр көсәйгән мәлдә илдең сәйәси аренаһында ла эшмәкәрлек әүҙемләшә һәм юғары вазифа биләүсе йәки бейегерәк үрләргә тырышыусылар уйлап-уйлап баш етмәҫлек мәсьәләләр күтәреп аптырата. Был уларҙың үҙҙәренә шулай итеп сәйәси мәрәй йыйыуымы, әллә инде сираттағы "кисҡенләшеү" осороmo - аңламаҫһың.**




# МИЛЛӘТТЕ КОНСТИТУЦИЯ ЯҠЛАЙ,

## йәки Милли ҡуҙға өрөп, сәйәси мәрәй йыймаҡсылармы?

Президент вазифаһына дәғүә итеүсе Михаил Прохоров (килә-һе һайлауҙарҙа, моғайын, ул тағы үҙ кандидатураһын күрһәтер) милли республикаларҙы бөтөрөү тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайны, шунда уҡ милли республикалар-ҙың атамаларын алмаштырыу темаһын да күтәреп сыҡтылар, бер ыңғайы милли телдәрҙе уҡытыу мәсьәләһен дә ҡуҙғаттылар. Ә инде РФ Дәүләт Думаһының Милли сәйәсәт буйынса комитет рәйесе Гаджимет Сафаралиев парламентҡа Рәсәй төбәктәрендә милли телдәрҙе көсләп уҡытыуға ҡаршы закон проекты индерелеүен белдерҙе. Парламентарий әйтеүенсә, һуңғы ваҡытта уға мәктәп уҡыусыларының ата-әсәләренән милли республикаларҙа урындағы телде рус теле иҫәбенә уҡытырға мәжбүр итеүҙәре тураһында хаттар күп килә икән. Телдең статусы тураһында яңы закон ҡабул ителһә, уҡыусылар ниндәй телдең улар өсөн туған тел булып тороуын һәм уны өйрәнергә теләү-теләмәүҙәрен үҙҙәре хәл итәсәк. Рус теле - мотлаҡ булып ҡаласаҡ, ә милли телдән баш тартырға ла мөмкин буласаҡ.

Тел уҡытыу темаһына ҡағылғас, ошо айҙа булған тағы ла бер "траги-фарс"ҡа туҡталып китмәү мөмкин түгел. Унда осраҡлы ғына рәүештә академик Фәнил Фәйзуллин да ҡатнаша һәм түбәндәгеләрҙе бәйән итте: "Дәүләт Думаһының Милли мәсьәләләр комитеты ҡарамағындағы Эксперт советының "Рәсәй халыҡтарының этномәҙәни ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү һәм тел сәйәсәте өлкәһендәге ҡануниәтте камиллаштырыу" (етәксеһе - Артеменко Ольга Ивановна, Мәғарифты үҫтереү федераль институтының этномәҙәни стратегияһы үҙәге директоры) тип аталған секция ултырышына осраҡлы ғына барып эләктем. Ҡатнашыусылар Татарстандан һәм Башҡортостандан килгәйне. Баҡтиһән, республикабыҙҙа "Образование и русский язык в школах Башкирии" тигән интернет-йәмғиәт бар икән, ошо йәмғиәттән унлап кеше, шулай уҡ Татарстандан да шул уҡ һанда вәкилдәр саҡырылғайны. Был кешеләрҙең барыһы ла Башҡортостанда - башҡорт телен, Татарстанда татар телен уҡытыуға әүҙем ҡаршы сығыш яһаусылар булып сыҡты. Үҙҙәренең ҡылығын улар: "Был диктат, был беҙҙең интернационализм тойғоһона ҡаршы килә һәм беҙ балаларыбыҙҙы мәктәпкә йөрөтөүҙән баш тартабыҙ", - тип аҡларға тырыша. Ольга Артеменконың беренсе һүҙҙәренән үк уның ошо интернет-йәмғиәт кешеләре яҡлы икәне аңлашылды.

Ә мин был төркөм алдында шулай тип сығыш яһаным: "Ни өсөн башҡа милли республикаларҙан вәкилдәр юҡ? Шундай етди, сетерекле проблемаларҙы тикшергәндә барлыҡ милли республикаларҙың да вәкилдәре мотлаҡ булырға тейеш. Икенсенән, нишләп һеҙ тик милли телдәргә ҡаршы сығыусыларҙы ғына йыйҙығыҙ? Мәҫәлән, бына Эксперт комиссияһына ингән бер генә фамилияны әйтәм - Сөләймәнов Рәйес Рәфҡәт улы - Волга буйының (Ҡазан) Төбәк һәм этнодини тикшеренеүҙәр үҙәге етәксеһе -ул даими рәүештә татар телен, милли республикаларҙы бөтөрөү тураһында сығыш яһаусыларҙың береһе. Тимәк, сараның ниндәйҙер тенденциоз маҡсаты бар?

Иң мөһиме - беҙ әлеге ултырышта ябай аң кимәлендә фекер йөрөтәбеҙ. Был мәсьәләне тикшереү өсөн иң тәүҙә Рәсәй Конституцияһының, республикалар Конституцияларының төп пункттарын белергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта милли тел менән дәүләт телен бутарға ярамай. Беҙ бит башҡорт йәки татар телен рус кешеләре башҡорт йәки татар телендә романдар яҙырлыҡ кимәлдә белергә тейеш, тигән талап ҡуймайбыҙ. Тел белеү - ошо ерҙә йәшәгән кешеләрҙең аралашыу, үҙ-ара аңлашыу мөмкинлеген киңәйтеү өсөн кәрәк. Социологик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Башҡортостанда, мәҫәлән, башҡорт милләтенән булмаған 87-88 процент халыҡ, ата-әсәләр башҡорт телен өйрәнеүгә ҡаршы түгел. Бында йыйылған кешеләр - ҡалған 12-13 процентҡа инеүселәрҙер, күрһәң (Ысынында, ундай кешеләр республикала 3 процентты ла тәшкил итмәй). Әгәр демократия, күпселек тураһында һүҙ алып барабыҙ икән, шул принциптарҙы тормошҡа ашырырға, уларға буйһонорға тейешбеҙ. Ә беҙ ғәзеллек, хоҡуҡтар талап иткән булып, үҙебеҙ үк уларҙы боҙабыҙ.

Тағы бер мәсьәлә - икенсе дәүләт телдәре: башҡорт теле, татар теле, рус теленең уҡытыу сәғәттәрен кәметеү иҫәбенә тормошҡа ашырылмай. Ул программала дөрөҫ ҡаралған. Шуға күрә, йәнәһе, башҡорт теле рус теле иҫәбенә уҡытыла, тигән һүҙ буш хәбәр. Бөгөн, ысынлап та, милли мәсьәлә бик киҫкен тора. Бер генә сәйәси партияның да милли мәсьәлә буйынса программаһы юҡ һәм уны эшләргә уйламайҙар ҙа. Ғөмүмән, Үҙәктең милли республикаларға, милли мәсьәләгә ике төрлө ҡарашы борсой. Мәҫәлән, Рәсәйҙең йөрәгендә - Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Түбәнге Новгородта, Хабаровскиҙа, Екатеринбургта хатта махсус униформалар кейеп, Рус маршы үткәрәләр, ә Башҡортостанда, Татарстанда республиканы, телде, мәҙәниәтте яҡлап Башҡорт маршы йәки Татар маршы үткәрһәләр, ҡатнашыусыларҙың барыһы ла шул көндө үк СИЗОларға алып барып тығылыр ине. Үрҙә ултырыусылар Рус маршы тураһында хәбәрҙар түгелме ни, ни өсөн уларҙы туҡтатыусы юҡ? Ни өсөн ысын экстремистар яза алмай, ә үҙ милләтен яҡлаусыларҙы язаға тарттырырға тырышалар? Интернационализм, милләтселек, экстремизмды патриотизм төшөнсәһе менән бутарға ярамай. Ә сарала ҡатнашҡан ике республика вәкилдәре тураһында нимә әйтер инем: улар, күрһәң, айырым көстәр тарафынан ойошторолған һәм улар тарафынан уҡ финанслана..."

Ысынлап та, Дәүләт Думаһындағы был секция ултырышын "траги-фарс" тип атамай сара юҡ. Сөнки Рәсәй Федерацияһы Конституция Судының 2004 йылдың 16 ноябрендәге ҡарарына ярашлы, был сара закон сығарыусыларҙың үҙҙәренең үк законды боҙоуы, РФ Конституция Судының ҡарарына ҡаршы сығыу булып тора. Әлбиттә, был судта "Татарстан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында", "Татарстан Республикаһының дәүләт телдәре һәм Татарстан Республикаһындағы башҡа телдәр тураһында", "Мәғариф тураһында" ТР Законы (аналогик ҡанундар Башҡортостанда ла ҡабул ителгән һәм судтың ҡарары барлыҡ милли республикалар өсөн дә ғәмәлдә - **Ред.**), "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында" РФ Законының статьялары тикшерелә һәм шундай ҡарар сығарыла: Татарстан Республикаһының (был урынға шундай законды булған һәр республика атамаһын ҡуйырға була - **Ред.**) дәүләт телдәре булған татар һәм рус телдәре дөйөм белем биреү учреждениеларында һәм башланғыс һәм урта һөнәри белем биреү учреждениеларында тигеҙ күләмдә уҡытылыуҙы билдәләгән норматив положение Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килмәй, сөнки норматив көйләүҙең ғәмәлдәге системаһындағы үҙенең конституцион-хоҡуҡи әһәмиәте буйынса ул татар (башҡорт - **Ред.**) теленең Рәсәй Федерацияһы ҡанундары менән билдәләнгән Федераль дәүләт мәғариф стандарттарына ярашлы тормошҡа ашырылырға һәм йомғаҡлау аттестацияһын үтеүгә, төп дөйөм белем алыу тураһында документ биреүгә һәм юғарыраҡ кимәлдәге белем алыуға ҡамасауламаҫҡа тейеш. Шул уҡ ҡарарҙың өсөнсө пунктына аҡҡа ҡара менән ҡарарҙың әйләнеп ҡайтҡыһыҙ булыуы, ялыу биреүгә урын ҡалдырмауы, көсөнә иғлан ителгәндән һуң шунда уҡ инеүе, туранан-тура ғәмәлдә булыуы һәм башҡа органдар һәм юғары вазифалы кешеләрҙең раҫлауы талап ителмәүе нығытылған. Кемдер тарафынан ойошторолған әлеге кешеләр төркөмөндә был хаҡта белмәгән хәлдә лә, РФ Дәүләт Думаһы депутаттары һәм "эксперттар" был хаҡта хәбәрҙар булырға тейеш һәм милли республикаларҙа милли телдәрҙе (был осраҡта һүҙ дәүләт телдәре тураһында бара - **Ред.**) уҡытыу мәсьәләһенә ҡабат-ҡабат "ревизия" яһап ултырыуҙары уларҙың абруйын арттырмай...

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Билдәле сәйәсмән Михаил Бугера Башҡортостан юлдаш телевидениеһына интервьюһында ошо хәлдәр буйынса шундайыраҡ аңлатма бирҙе: "Михаил Прохоровҡа үҙенең партияһына билдәлелек яулау өсөн мәғлүмәт яланына ниндәйҙер "осло" тема сығарыу идеяһы кәрәк булғандыр инде, шуға ла ул ошондайыраҡ һүҙ әйтеп, үҙенә сәйәси мәрәй йыймаҡсы булғандыр. Республикаларҙың атамаһын алмаштырыу буйынса һүҙ әйткән кеше менән дә шундай уҡ хәл булыуы мөмкин. Моғайын, политтехнологтар, политологтарҙан кемгәләр күңелһеҙ булып киткәндер. Уларға бит фараздар ҡороу, уларҙы "төбөнә төшөп өйрәнеү" өсөн шундай киҫкен мәлдәр кәрәк. Әммә мин власть органдарындағы етди даирәләр (федераль власть кимәлендә булһынмы, төбәк властарындамы) был усаҡҡа утын өҫтәр тип уйламайым. Минеңсә, был - политологтарҙың һәм ҡайһы бер мәғлүмәт саралары вәкилдәренең - кемдер яҙырға тема таба алмай, кемдер үҙенең кәрәклеген тоймай башлай - үҙен генә ҡайғыртҡан мәкерле бер уйҙырмаһы..."**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Конгресс-холда сираттағы Паралимпия йыйылышы булып үтте. Унда Рәсәй йыйылма командаһының Лондонда үткән Паралимпия уйындарында сығыш яһауына йомғаҡ яһалды, беҙҙең спортсыларҙы 2016 йылда Рио-де-Жанейрола үтәсәк киләһе Паралимпия уйындарына әҙерләү концепцияһы тикшерелде.

✓Өфө ҡыҙы 25 йәшлек Элина Кираева "Рәсәй һылыуҡайы-2012" конкурсында еңеү яуланы. Бәйгелә ҡатнашҡан 63 гүзәл зат араһынан ул иң һылыуы тип танылды. Финал Мәскәүҙә үтте. Был сибәркәйҙең әлеге конкурста тәүге еңеүе түгел - 2009 йылда ул "Рәсәй Көнсығышы һылыуҡайы" исеменә лайыҡ була. Хәҙер Элина донъя кимәлендә үтәсәк һылыуҡайҙар конкурсында ҡатнашырға әҙерләнә.

✓"Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы VI "Күп милләтле Рәсәй" бөтә Рәсәй асыҡ журналистар конкурсында еңеүсе булды. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса телекомпания "Радиотапшырыуҙар шәлкеме" номинацияһында "Между Волгой и Уралом", "Шире круг" шәлкемдәре, шулай уҡ "Ауылым офоҡтары" һәм "Абажур" радиотапшырыуҙары өсөн беренсе урынға лайыҡ булды. Бәйгегә Рәсәйҙең 52 төбәгенән йөмғөһе 739 эш ҡабул ителгән булған.

✓Өфөлә 26 декабрҙә старт аласаҡ йәштәр командалары араһында хоккей буйынса донъя чемпионатының рәсми атрибутикаһы һатыла башлаясаҡ. Киң ассортиментта свитер, толстовка, футболка, кепкалар тәҡдим ителәсәк. Донъя чемпионаты атрибутикаһын "Чемпион", "ИнтерСпорт" спорт селтәрҙәрендә, "Өфө-Арена" боҙ һарайында, Спот һарайында, "Өфө" халыҡ-ара аэропортында, "Салауат Юлаев" хоккей клубының фирма һәм интернет-магазиндарында һатып алып була.

✓Стәрлетамаҡ һәм Бөрө ҡалалары балалар йорттарында, шулай уҡ Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се Республика балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр "Йондоҙлок" Бөтә Рәсәй балалар художестволы ижады конкурсының аҙаҡҡы этабында ҡатнашасаҡ. Сара Мәскәүҙә үтәсәк. РФ Мәғариф һәм фән министрлығы менән ойошторолған бәйгелә Рәсәйҙең 24 субъектынан ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған 12-17 йәштәрҙәге 200-гә яҡын бала ҡатнашасаҡ.

**"Башинформ"дан.**

✓ *6-8 декабрҙән баш ҡаланың 17 майҙанында ит йәрминкәләре асылып, улар 29-30 декабргә тиклем ҡулланыусыларҙы ҡабул итәсәк.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ИҒӘНӘ ТҮЛӘҮ ЕҢЕЛЛӘШӘ

**Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең Интернет-битендә пенсияны дәүләт финанслауы Программаһында ҡатнашыусылар өсөн хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөнә өҫтәмә страховка иғәнәләре түләү өсөн квитанция тултырыу һәм баҫып сығарыу ойошторолдо.**

Квитанцияны сығарыу режимына күсеү өсөн "ДСВ түләү өсөн квитанция баҫыу" тигән баннерҙы файҙаланып, "Электрон хеҙмәттәр" менюһының пунктын һайларға кәрәк. Бөгөнгө көнгә "Башҡортостан Республикаһында 260 меңдән ашыу граждан пенсияны дәүләт финанслауы Программаһына ҡушылып, үҙ пенсияларының тупланма өлөшөн булдырыуҙа ҡатнаша. Улар үҙ иҫәптәренә 428 млн. һум күсерҙе ,- ти Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идараһыһы Фоат Хантимеров.- Ҡатнашыусыларҙың 68 проценты аҡсаны эш биреүсе аша күсерә, 32 проценты кредит ойошмалары аша үҙ аллы түләй. Электрон хеҙмәттәрҙең Бүлексә эшләгән яңы төрө Пенсия фонды идаралығына барып йөрөүҙән азат итә, квитанцияны үҙ аллы тултырған саҡта хаталаныуға ла юл ҡуймай". "Хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөнә өҫтәмә страховка иғәнәләре индереү һәм пенсия тупланмаларын булдырыуҙа дәүләт ярҙамы тураһында"ғы Федераль законға ярашлы, әгәр граждандар 10 йыл өҙлөкһөҙ иғәнә индереп барған хәлдә, дәүләт йыл һайын 2 меңдән алып 12 мең һумға тиклем күләмдә пенсия тупланмаһын финанслауҙа ҡатнаша.

**БР буйынса Рәсәй Пенсия фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

# ЭШҺЕҘҘӘР ҺАНЫ КӘМЕЙ

**Рәсәйҙең Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы илдәге эшһеҙҙәр һанын билдәләү маҡсатында тикшереү уҙғарған. Алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ағымдағы йылдың 23 сентябренән 25 октябргә тиклем халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәрендә иҫәптә торған эшһеҙҙәр һаны 40483 (3,9 процент) кешегә кәмегән. Шулай итеп, октябрь аҙағында Рәсәйҙә дөйөм эшһеҙҙәр һаны 992320 кеше тәшкил иткән.**

Тикшереү уҙғарылған арауыҡ эсендә Рәсәйҙең 73 төбәгендә эшһеҙҙәр һаны кәмегән. Айырыуса Ҡалмыҡ һәм Тыва республикаларында, Пермь крайында, Еврей автоном округында, Кострома, Рязань һәм Ҡурған өлкәләрендә был күрһәткес юғары. Ә ҡайһы бер төбәктәрҙә, киреһенсә, эшһеҙҙәр һанының артыуы күҙәтелгән. Был исемлеккә Татарстан, Ингуш республикалары һәм Амур өлкәһе инә.

Бойондороҡһоҙ эксперттар фекеренсә, эшһеҙҙәр һанының кәмеүендә мәшғүллек үҙәгенең дә, Хеҙмәт министрлығының да хеҙмәте ҙур түгел. Юғары иҡтисад мәктәбенең социаль сәйәсәт һәм социаль-иҡтисади программалар институты директоры Сергей Смирнов халыҡтың үҙенә эш урыны табыуын илдәге иҡтисади конъюнктураның яйлы булыуына бәйләй. "Мәшғүллек хеҙмәте эшһеҙлек ситуацияһына бик әҙ йоғонто яһай. Ул илдең макроэкономик торошона тәьҫир итмәй. Бөгөнгө көндә Рәсәйҙең дөйөм иҡтисади күрһәткесе күҙгә сағылып торған хәүефле сигнал күрһәтмәй. Хәҙер беҙҙә автомобиль баҙары үҫә, ә был, үҙ сиратында, эш урындары барлыҡҡа килтерә. Ғөмүмән, хеҙмәт баҙарына тәьҫир итеүсе төп фактор - ул дөйөм иҡтисади конъюнктура", - ти ул.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ХЕҘМӘТ КҮРҺӘТЕҮГӘ...

## ихтыяж бар

**Бөгөн бер генә кеше лә: "Мин был көндө бер тин дә сарыф итмәнем", - тип әйтә алмай. Сөнки һәр ҡайһыбыҙ, иртән күҙебеҙҙе асыр-асмаҫтан барып "Ильич лампаларын" тоҡандыра, ә счетчиктар "тек-тек" килеп беҙҙең кеҫәләге аҡсаны "һанай" башлай. "Зәңгәр яғыулыҡ" яндырһаҡ та, һыу кранын асһаҡ та, тиндәребеҙ "тып-тып" итеп, икенсе кеҫәгә "аға". Ләкин улар бушҡа аға тип уйлай күрмәгеҙ - былар барыһы ла беҙҙең ҡулланған хеҙмәттәребеҙ өсөн түләү. Ә беҙ көн һайын бихисап хеҙмәт менән файҙаланабыҙ.**

Ҡулланыусылар баҙарында беҙгә кәрәк хеҙмәттәрҙең һаны бик күп. Мәҫәлән, сауҙа, йәмәғәт туҡланыуы, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү - автосервис, бөҙрәханалар, кейем тегеү, бәйләү, аяҡ кейемдәрен һ.б. ремонтлау... Осона ла сығырлыҡ түгел. Әммә был хеҙмәттәргә ихтыяж бар һәм халыҡтың уларға мөрәжәғәт итеү күләме йылдан-йыл арта ғына бара. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Ғәлиуллиндың ҡулланыусылар баҙары идаралығы һәм туризмды үҫтереү буйынса белгестәр менән берлектә үткәргән матбуғат конференцияһында билдәләнеүенсә, былтыр туғыҙ айҙа хеҙмәт күрһәтеүҙәрҙең дөйөм күләме 5,7 млрд һум тәшкил итһә, быйыл ошо осорҙа был һан 6,1 млрд һум булған. Әле баш ҡалала 5,6 меңдән ашыу сауҙа һәм йәмәғәт туҡланыуы, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү буйынса 2181 предприятие һәм шәхси эшҡыуар эшләй.

Баш ҡалала йыл һайын ауыл хужалығы продукцияһы һатыу буйынса йәрминкәләр ҙә ойоштороло. Уларҙа хаҡтар ҡаланың сауҙа кәштәләрендәге хаҡтарҙан 10 -15 процентҡа арзанырaҡ була һәм шуға күрә халыҡ ҡышҡылыҡҡа күпләп "запас" туплап ҡалырға тырыша. Быйыл көҙгө йәрминкәләр 15 сентябрҙән 28 октябргә тиклем һәр ял көндәрендә ойошторолоп, уларҙа дөйөм алғанда 250 мең кеше ҡатнашҡан. Был йәрминкәләрҙә матур бер күренеш күҙәтелгән: 75 кешегә, нигеҙҙә, пенсионерҙарға, һатып алған продукцияһын өйөнә тиклем бушлай алып барып биреү ойошторолған.

Ә инде 6-8 декабрҙән баш ҡаланың 17 майҙанында ит йәрминкәләре асылып, улар 29-30 декабргә тиклем ҡулланыусыларҙы ҡабул итәсәк.

Шулай уҡ ылыҫ ағастары һатыу буйынса 154 сауҙа нөктәһе урыны ла билдәләнгән. Шыршы сауҙаһының иң әүҙемләшкән ваҡыты декабрҙең 20-ләренән башлана, ти ҡулланыусылар баҙарының нисек "тын алышын" һәр саҡ күҙәтеп барыусы белгестәр. Әммә бөгөндән Яңы йыл байрамына әҙерлек йылдам бара һәм 1 декабрҙән үк баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары байрам һулышын тоясаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ТӘҮГЕ ТУРИСТ ПАСПОРТЫ

**Һүрәттәге паспорт - Башҡортостанға килеүсе ҡунаҡтар өсөн тәүге тапҡыр булдырылған үҙенсәлекле шәхеснамә, тиергә лә мөмкин. Унда баш ҡалаға килеүсе туристар өсөн барлыҡ мәғлүмәт бирелгән.**




Шулай уҡ ҡаланың туристик-карта-схемаһы, ваҡиғаларға бәйле туристик альманах та (һүрәттә) - "тәүге ҡоймаҡ". Ләкин уларҙың төйөрһөҙ булыуы ҡулға алыу менән тойола. Был буклеттар 2013 йылға планлаштырылған ҙур саралар алдынан баш ҡаланың барлыҡ ҡунаҡханаларына, аэропортҡа, тимер юл вокзалына таратыласаҡ. Баҫма сығанаҡтарҙа мәғлүмәт ике телдә - русса һәм инглизсә - бирелә. Был үҙенә күрә Өфөгә туристарҙы ылыҡтырыуҙың бер юлы ла булып тора.

# ИҢ МӨҺИМЕ - ТАМАҠ ТУҠ!

**Әлеге ваҡытта Өфөнөң - Киров, Калинин, Октябрь райондарында социаль ашхана эшләй. Уларҙа 270 кеше хеҙмәтләндерелә. Йыл башынан бындай хеҙмәтте 1340 кеше алған.**

Ваҡыт был учреждениеларға ихтыяж барлығын раҫлай һәм шуның өсөн ноябрҙә Ленин районында - ике, Совет, Орджоникидзе һәм Дим райондарында берәр социаль ашхана үҙ ишектәрен асасаҡ. Дөйөм алғанда, 1 декабрҙән баш ҡаланың барлыҡ райондарында ла социаль туҡланыу урындары эш башлаясаҡ. Ә инде Олимпия урамындағы туғыҙынсы ашхана махсус рәүештә йәшәү урындары булмаған (асарбаҡтар) категорияны хеҙмәтләндерәсәк.

# ТӨҘӨҮҘӘН БУШАМАЙБЫҘ, ШӨКӨР...

**Йылдың туғыҙ айында баш ҡалала дөйөм майҙаны 80 мең квадрат метрҙы тәшкил иткән төрлө форматтағы 97 яңы сауҙа объекты төҙөлгән йәки реконструкциянан һуң үҙ ишектәрен асҡан. Уларҙың сафҡа инеүе яңы 1500 эш урынын булдырыуға булышлыҡ иткән.**

Шулай уҡ Өфөлә алда торған ҙур сараларға әҙерлек барышында ла бихисап эштәр башҡарыла. Киләһе йылда Башҡортостанда үтәсәк Йәштәр командалары араһында шайбалы хоккей буйынса донъя чемпионатына, IV Халыҡ-ара Ҡышҡы балалар уйындарына ҡатнашыусыларҙы һәм уларҙың көйәрмәндәрен ҡабул итеү маҡсатынан ҡунаҡхана комплекстарында реконструкция уҙғарылып, урындар арттырылған. Ҡунаҡханалар донъя стандарттарына тап килтерелгән - уларҙа үҙҙәренең кер йыуыу, химик таҙартыу хеҙмәте бар. Бындай хеҙмәт ҡаралмағандары иһә махсус предприятиелар менән килешеү нигеҙендә был хеҙмәттәрҙе күрһәтәсәк.

# Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышы булып үтте, унда 40 мәсьәлә тикшерелде. Депутаттар Уставҡа үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индереү яҡлы тауыш бирҙе. Барлыҡ төҙәтмәләр алдан Өфө райондарында үткән йәмәғәт тыңлауҙарында ҡаралғайны. Ҡала Уставына индерелгән төҙәтмәләрҙең береһе булараҡ "Совет депутатының вәкәләттәрен тормошҡа ашырыу гарантиялары" исемле яңы статья индерелде. Муниципаль депутат статусын регламентлаған федераль закон булмағанға күрә, бындай өҫтәмә айырыуса актуаль булып тора.

✓Өфө хакимиәте структураһында яңы бүлек - Граждандарҙы яҡлау идаралығы булдырылды. Ул шул уҡ исемле муниципаль учреждениены алмаштырасаҡ. Был хаҡта ҡала Советы ултырышында Өфө округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов һөйләне. Ҡайтанан булдырылған Идаралыҡ граждандар оборонаһы һәм халыҡты ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән яҡлау сараларын ойоштороу буйынса ҡарарҙар ҡабул итәсәк. Ҡала округы хакимиәте структураһында йәмғеһе 22 бүлек, шул иҫәптән ете территориаль орган иҫәпләнә.

✓Көн һайын иртәнге сәғәт 11-ҙә Башҡортостан Республикаһының Милли музейында гимн яңғыраясаҡ. Уны композитор Илшат Хәлилов музейҙың генераль директоры Ғәли Вәлиуллин шиғырына яҙған. Әҫәр башҡорт фольклоры көйҙәренә таянып ижад ителгән.

✓Өфө ҡалаһы Ленин районы хакимиәте башлығының социаль һәм гуманитар мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Мирхәт Ҡаҙарғолов "Иң яҡшы муниципаль хеҙмәткәр" Бөтә Рәсәй конкурсының "Социаль үҫеш" номинацияһында еңеү яуланы. Конкурсҡа Өфө ҡалаһы Ленин районының бер нисә йыл дауамында алып барылған социаль йүнәлештәге эшмәкәрлегенә анализ һөҙөмтәләре, уларға өҫтәп фотоһүрәттәр һәм киң мәғлүмәт сараларында баҫылып сыҡҡан публикациялар тәҡдим ителде.

✓Өфөлә йәмғеһе ун ҡунаҡхана төҙөү планлаштырыла, уларҙың өсәүһе 2013 йыл башында төҙөлә башлаясаҡ. Был өс ҡунаҡхана Дуҫлыҡ монументы, Ҡунаҡһарай һәм элекке Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһе урынында төҙөлөп ятҡан сауҙа-күргәҙмә комплексы биләмәләрендә төҙөләсәк.

*ӘЙТҺӘҢ - ҺҮҘ*

# КЕРЕГЕҘ МАТУР САЙҠАЛМАҒАН...

**Халыҡ араһында шундай көләмәс йөрөй: йәш килен йылғанан кер сайҡап ҡайтҡас, ҡәйнәһе уны күргән дә: "Юҡ, килен, кереңдең кере китмәгән, бар, ҡабат барып сайҡа!" - тигән. Килен ҡайтанан йылға буйына төшөп, керен тағы бер ҡат сайҡаған. "Юҡ, килен, кереңдең кере китмәгән", - тип ҡаршы алған уны ҡәйнәһе икенсе тапҡырҙа ла. - Бар, эшеңде эш итмәйенсә ҡайтма!" Шулай итеп, ҡәйнәһе киленен тағы кире борған. Аптыраған килен өсөнсө тапҡыр барыуында йылға буйында бер аҙ баҫып торған-торған да, аяғындағы итегенең бысрағын йыуып, ялтыратып, ҡайтыуға табан юл алған. Был юлы уны ҡәйнәһе йылмайып ҡаршы алған, керҙе ҡарап та тормайынса: "Инде бына кере ҡалмаған", - тигән.**

Өфө районы башҡорттары ҡоролтайының Шамонино ауылында уҙған ултырышынан һуң тап ошо көләмәсте иҫкә төшөрҙөм дә, сараны үткәреүселәргә: "Керегеҙ матур сайҡалмаған, керегеҙҙең кере китмәгән", - тип әйткем килде. Быныһ сәбәбе - Өфө районы башҡорттары йыйылған сараның нигеҙҙә рус телендә алып барылыуы, рус телендәге сығыштар... Йәғни, бөгөн беҙгә, башҡорттарға, ысынлап та, ҡыйыш атып тура тейҙереүсе тәрбиәсе - көләмәстәге "мыжыҡ" ҡәйнә кәрәктер ул...

Был күренеш бер бөгөн генә күҙәтелмәй һәм бер Өфө районына ғына хас түгел. Башҡорт ҡоролтайҙары ултырыштары, төрлө саралары йәки төрлө байрамдар уңайынан башҡорт ауылдарына килгән рәсми вәкилдәрҙең телмәр теле сәбәпсе быға башлыса. Әйе, Конституцияла ла, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы законда ла башҡорт теле рус теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле булып тора. Әммә башҡорттар ғына йәшәгән төбәктәрҙә үткән сараларҙа, шул иҫәптән район, ҡала башҡорттары ҡоролтайы ултырыштарында рәсми вәкилдәрҙең һәм ҡайһы бер сығыш яһаусыларҙың русса һүҙ сурытып тороуы хәҙер ғәҙәтигә әйләнде, һәм был бер ҙә генә ҡолаҡҡа ятышлы түгел.

Шамонино ауылында үткән Өфө районы башҡорттары ҡоролтайы ла бындай күренештән арына алмағанлығын раҫланы. Делегаттар составы башлыса башҡорт теле уҡытыусылары, төрлө конкурстар еңеүселәре, балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре менән эшләүсе тәрбиәселәр, уҡытыусылар, ахырҙа, милләтем, илем, телем, тип янып йөрөүселәрҙән тора ине. Уларҙың, исмаһам, береһе сараны башҡорт телендә алып барыуҙы талап итеп сығыш яһаманы. Үҙебеҙгә, башҡорттарға, башҡорт теле кәрәкмәгәс, рәсми сараларҙа ошо телдә һүҙ алып барырға оялғас йәки ҡурҡҡас, башҡорт телен уҡытыуҙы тыялар йәки уны бөтөрәләр, тип лаф ороуҙан ни файҙа? Сара барышында урындарҙа ҡоролтайҙың төүге ойошмаларын булдырыу мәсьәләһе күтәрелде, башҡарма комитеттың яңы составы һайланды. Рәйес вазифаһын хәҙер "Черкассы" совхозы" муниципаль унитар ауыл хужалығы предприятиеһы директоры Баймөхәмәт Шәйбәков башҡарасаҡ. Шулай уҡ беренсе тапҡыр район башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағында йәштәр советы ойоштороло һәм уның рәйесе итеп Рәмил Кәбиров һайланды. Әлбиттә, йыйылыусылар сараның "юғары кимәлдә ойошторолоуын" билдәләне һәм ҡәнәғәт булып таралышты. Әммә күңелгә ултырған теге "кер" генә китмәне...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# АҠШ-та ҮЛЕМ ЯЗАҺЫ БАР, БЕҘҘӘ...

**Рәсәйҙең бер билдәле социологик фонды үткәргән күптән түгелге тикшеренеүҙәр бик ҡыҙыҡлы һөҙөмтәләр биргән. Халыҡтың күпселеге хәҙерге заманда байығыуҙың иң отошло алымы - ул "уңышлы никах" һәм "мираҫ алыу" тип билдәләгән. Быны ғәжәйеп күренеш итеп ҡабул итергә кәрәкмәйҙер. Һуңғы сирек быуатта дәүләтебеҙҙә барған үҙгәртеп ҡороуҙар кешенең психологияһын плюс билдәһенән ҡырҡа минуска үҙгәртте. Совет кешеһенә хас яҡшы сифаттар күҙ алдында селпәрәмә килде. Туған туғанды белмәй башланы, изгелек, бушлай ярҙам итеү кеүек күренештәр яңы быуын өсөн бөтөнләйгә ятҡа әйләнде.**

● Эйе, байығыуҙың әле телгә алынған алымдары йәмғиәттә киң тарала бара. Яңыраҡ Владимир Путин отставкаға ебәргән оборона министры Анатолий Сердюковтың тормош юлы быны асыҡ миҫалы булып тора. Заманында ул мебель магазины директоры булып эшләгән. Шул саҡта Виктор Зубковтың Петербургтың һалым инспекцияһын етәкләгән ҡыҙына өйләнә. Был никах уның яҙмышында хәл иткес роль уйнай: тиҙҙән ул ҡайныһы ярҙамы менән Рәсәйҙең һалым хеҙмәтен, шунан оборона министрлығын етәкләй башлай. Киң матбуғат саралары уны һөҙөмтәле менеджер итеп күрһәтә. Ысынлап та, был менеджерҙың эш "һөҙөмтәләре" хайран ҡалырлыҡ. Үҙе менән әйәртеп алып килгән "юбкалы батальон" оборона министрлығының мөлкәтен, аҡсаһын үҙ кеҫәһенә тултырыу менән шөғөлләнә, Бөтә Рәсәй буйлап урынлашҡан милекте үҙ файҙаһына хосусилаштырып, Сердюковтың туғандарын, һөйәркәләрен байытыу менән мәшғүл була. Сердюковтың һөйәркәһе Евгения Васильеваның фатирында үткәргән тентеү ваҡытында оперативниктар унда дөйөм хаҡы өс миллион долларлыҡ бер мең ярым (!) балдаҡ таба. Сердюковтың апаһы Галина Пузикованың һәм уның иренең Мәскәүҙә, Петербургта һәм Анапала тиҫтәнән ашыу элиталы фатирҙары, автомобилдәре, гараждары булыуы асыҡлана. Сердюков еҙнәһенең фирмаһын министрлыҡтың мөлкәтен үҙләштереүҙә оҫта ҡуллана. "Һөҙөмтәле менеджер" булыу ошоно аңлаталыр инде. Улар тарафынан бөтә донъя алдында маҡтанған ГЛОНАСС системаһын төҙөгәндә генә 6,5 миллиард һум аҡса урлана...

● Сүриәлә барған сыуалыш Рәсәй менән Төркиә араһында көсөргәнешкә килтерҙе. Владимир Путин Төркиәгә октябрҙә көҙәлланған визитын декабргә күсерергә мәжбүр булды. Төрөк сығанаҡтары мәғлүмәттәре буйынса, Мәскәүҙән Дамаскка осҡан самолетта, йәнәһе, ҡорал бар, тип АҠШ-тан хәбәр иткәндәр. Америка Рәсәй менән Төркиәне талаштырырға тырыша ла инде.

● АҠШ-та булып үткән президент һайлауҙары менән 37 штатта үткән референдумдарҙа 174 бәхәсле һорауға яуап бирелде. Иң ҡыҙыҡ референдум Калифорнияла булып үтте. Һайлаусылар йыл һайын һалымдарҙың 6 млрд. долларға артыуына ризалығын бирҙе. Өҫтәмә аҡсалар байҙарға һалымды арттырыу юлы менән тупланасаҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ - был аҡсалар мәктәптәрҙә һаҡлап ҡалыуға тотоноласаҡ икән. Ә беҙҙең илдә барған оптималләштереү процестары мәктәптәрҙе ябыуға килтерҙе. Әммә был мәктәптәрҙә эшләүсе уҡытыусыларҙың, ата-әсәләрҙең зарын беҙҙә берәү ҙә ишетмәй. Демократик дәүләттәр референдумдарҙы ошо сетерекле һорауҙарҙы хәл иткәндә йыш ҡулланыуы менән айырылып тора. Беҙҙең илдә Горбачев заманында үткәрелгән референдумдар ғына хәтерҙә ҡалған.

● Шул уҡ Калифорния штатында үлем язаһын һаҡлап ҡалырға булдылар. Был язаны тик 1964 йылда Орегон штатында ғына референдум аша юҡҡа сығарған булғандар икән. Бер нисә йылдан унда ла был язаны кире тергеҙгәндәр. Беҙҙең Рәсәйҙә һәр төбәктең был мәсьәләне үҙ аллы хәл итә алыуын күҙ алдына килтереүе лә мөмкин түгел. Конституция буйынса федератив дәүләт булһаҡ та... Ул ғына түгел, Евросоюз талап иткән шартты үтәп маташабыҙ: йәнәһе, үлем язаһы ярамаған эш. АҠШ менән Ҡытай, нишләптер, был "демократик" сараға төкөрөп ҡарай. Быға аптырарға кәрәкмәй, көслө дәүләттәр үҙенсә бойондороҡһоҙ сәйәсәт алып бара шул.

**Бәхтейәр ӘХӘТОВ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БУШЛАЙ ЕР...

## ғаилә хәлдәрен еңеләйтәсәк

**Быйыл март аҙағында Өфө ҡала округы Советы ҡарары менән өс һәм өстән күберәк бәлиғ булмаған, шулай уҡ инвалид бала тәрбиәләүсе льготалы категория граждандарына шәхси төҙөлөш өсөн бер тапҡыр бушлай ер биреү тәртибе раҫланғайны. Участкалар муниципаль милектә булған һәм дәүләт милке сикләнмәгән ерҙәрҙән бирелергә тейеш.**

Әлеге ваҡытта иҫәптә 2808 кеше тора, шуларҙың 1980-е (71 проценты) - өс һәм унан күберәк бәлиғ булмаған бала тәрбиәләүсе ғаиләләр, 828 кеше (29 проценты) - инвалид бала тәрбиәләүселәр.

Бөгөнгә төҙөлөш өсөн тәүге территориялар ҡаланың Октябрь (Нуғай ҡасабаһы) һәм Калинин райондарында (Йылҡыбай-Федоровка-Самохваловка ауылдары территориялары) билдәләнгән. Айырып әйткәндә, Нуғай ҡасабаһында бүленәсәк майҙан 54 мең квадрат метр тәшкил итһә, Калинин районында 1359 участка 163 гектарҙа урынлашасаҡ. Шулай уҡ Самохваловка ҡасабаһы эргәһендә тағы ла 514 участкала сиктәрҙе билдәләү эштәре алып барыла. Бер участканың майҙаны 10-15 сутый.

Әлеге ваҡытта льготалы категорияға ҡараған граждандарҙы тулыһынса ер участкалары менән тәьмин итеүҙә ҡытлыҡ һиҙелә. Өҫтәмә территорияларҙы Өфө һәм Благовещен районҙарынан алыу буйынса килешеү әҙерләнә. Шулай уҡ бүленгән территорияларға инженер селтәрҙәрен (юлдар, һыу, газ, электр селтәрҙәрен һалыу һ.б.) үткәреү буйынса республика программаһы эшләнә.

**Өфө ҡала округы сайтынан.**

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

# АТЕРОСКЛЕРОЗ



❖ Юл япрағы үләне төнәтмәһе эсеү яҡшы һөҙөмтә бирә. 1 ҡалаҡ ваҡланған үләнде бер стакан ҡайнар һыуҙа 10 минут тоторға. Бер сәғәт эсендә бәләкәй бүлемдәргә бүлеп эсеп бөтөрөргә.

❖ Юл япрағы үләне һутын шундай уҡ күләмдәге бал менән бутарға, 20 минут ҡайнатырға. Һалҡын урында яҡшы ябылған һауытта һаҡларға. Көнөнә 2 ҡалаҡ, иртән һәм кис ҡабул итергә.

❖ 200 грамм мышар ҡабығын ярты литр һыуға һалып, талғын утта 2 сәғәт буйына ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап ашар алдынан ярты сәғәт алда ҡабул итергә.

❖ Ҡан тамырҙарын нығытыу өсөн көнөнә бер лимондың һутын эсергә. Ярты лимонды тышынан таҙартып, турарға, өҫтөнә ылыҫ төнәтмәһе (1 ҡалаҡ ылыҫты 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә) ҡойорға. Ашар алдынан бер сәғәт алда йәки ашағандан һуң бер сәғәт үткәс эсергә. Көнөнә 2 лимон ҡулланыла. Дауаны 2-3 аҙна дауам итергә, һуңынан бер ай ял, унан тағы ҡабатларға.

❖ 2 лимон менән әфлисунды өлөштәргә бүлеп, ит турағыс аша үткәрергә. Ошо массаны 2 ҡалаҡ бал менән бутарға. Быяла банкала бер тәүлек буйына бүлмә температураһында торорға, һуңынан һыуыткысҡа ҡуйырға. Көнөнә 2 балғалаҡ ашарға, сәйгә ҡушып эсергә лә мөмкин.

❖ Май уртаһында болон клеверы сәскә атҡас, уның алһыу сәскәләрен йыйып, ҡояш төшмәгән урында киптерергә. Литрлы банканы яртылаш сәскәләр менән тултырғас, 0,5 литр араҡы ҡойоп, 2 аҙнаға ҡараңғы урынға ултыртып ҡуйырға. Төшкө аш ваҡытынан алда йәки төнгә ҡарай 1-әр ҡалаҡлап ҡабул итергә. Дауаланыу курсы 3 ай. 2 аҙна ял итеп алғандан һуң, тағы ла 3 ай дауаланырға. Ҡолаҡ шауы, баш ауыртыуы менән бергә күҙәтелгән атеросклероздан бигерәк файҙалы. Был төнәтмәнең тағы бер файҙалы яғы бар - башҡа саралар ярҙам итмәгән осраҡта ла ул баш һөйәге эсендәге ҡан баҫымынан дауалай.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

### Ун беренсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Нимә ул мосолманлыҡ? Уҡытыусы мосолманлыҡтың төп шарттарын аңлатҡан саҡта, тағы бер тапҡыр дин менән милләттең бер үк төшөнсә түгеллеген иҫкәртеп үтергә тейеш. Мосолман булыуҙың төп биш бурысы бар. Шул биш бурысты үтәгән сүрәттә генә һин ысын мосолман булаһың. Ә башҡортлоҡ булмышы тыумыштан килә, һин милләтле булып тыуаһың. Диндә һайлап алып була, милләтте һайламайҙар. Әммә бер кем дә бер кемгә лә ниндәй булһа ла диндә айырып маҡтап, көсләп тағырға тейеш түгел. Ислам тураһында һөйләгәндә лә был диндең төп бурыстарын һанап китеү мотлаҡ, тик был дингә өгөтләү йүнәлешендә булырға тейеш түгел. Ниндәй ҙә булһа дингә ҡарата бәлиғ булмаған балалар алдында өгөт-нәсихәт закон тарафынан тыйыла. Был мәсьәләлә бик һаҡ булыу кәрәк.

### Ун беренсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Кеше дин юлына баҫҡан икән, шул дин талаптарын, әлбиттә, үтәргә тейеш. Билдәле, ниндәй генә дин булмаһын, ул күңел сафлығы талап итә. Һин доға уҡыйһың икән, йола башҡарыу өсөн генә түгел, ә күңелеңде таҙартыу өсөн уҡыйһың. Сөнки һин Алла менән бәйләнешкә инәһең. Саф күңелдән уҡылған доға ғына Алла тарафынан ҡабул ителә. Доға уҡығанда башҡа бер ни тураһында ла уйларға, фекереңде ситкә йүнәлтергә лә ярамай. Шулай иткәндә, мейелә сыуалған уй-фекерҙәр бер йүнәлештә көйләнә, һин яҡшы ваҡиғалар тураһында ғына уйларға тырышаһың.

### Ун беренсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Диндә доға уҡыу мотлаҡ һанала һәм һин үҙеңдең уй-фекерҙәреңде көйләп алаһың. Ә йәмғиәттә иһә мотлаҡ үтәлергә тейешле әхләҡи бурыстар бар. Ул - әйтеп үтеүебеҙсә, иң элек үҙ намыҫың алдында яуаплылыҡҡа бәйле. Мәҫәлән, һин берәй нәмәне эшләргә тейешһең, әммә эшләй алманың. Әммә ул хаҡта үҙеңдән башҡа берәү ҙә белмәй. Һин яуаплылыҡтан ҡурҡып, алдайһың. Һин башҡаларҙы түгел, үҙеңде алдаһың, үҙ намыҫың алдында ялғансы булып ҡалдың. Йәки таныш булмаған берәүһе ярҙам һораны икән - ярҙам итеүитмәү һинең ҡарамағыңда. Һинең ҡарамағыңда ғына түгел, ә намыҫыңда. Үҙ-үҙеңә ихтирам иткән кеше бер ваҡытта ла үҙ намыҫы алдында ялғанламай. Ә үҙеңә ихтирам бөттөмө - һиндә рухи тарҡалыу, һыныу башлана. Күңел төшөнкөлөгө тип атала ул. Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә, тиҙәр. Әлбиттә, ҡайһы бер алдаҡтың башҡаларға беленмәй үтеп китеүе лә ихтимал, әммә барыбер намыҫың тынғылыҡ тапмаясаҡ. Ялғандың аяғы ҡыҫҡа, ти халыҡ. Йыландың ағыуы телендә, ямандың ағыуы күңелендә, тигән мәҡәл бар. Тимәк, һинең ялғаның - һинең күңел бысраҡлығың ул.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ШАҢДАУ

**Гәзиттең 40-сы һанында Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай ҡорған "Үҙаллылыҡ - хоҡуҡ ҡына түгел, үҙең һәм илең өсөн яуаплылыҡ та..." тигән әңгәмәне уҡығас, үҙ фекерҙәремде еткермәй түҙмәнем. Демократия юҡ, тип зарланһаҡ та, РФ Конституцияһында 29-сы статья бар. Унда "Рәсәйҙә фекер һәм һүҙ азатлығы гарантиялана" тип яҙылған. Ошо гарантия менән ҡартайған көнөмдә бер файҙаланып ҡалмаҡсымын. Шул уҡ ваҡытта әйткән һүҙ-фекерем хәҡикәттән генә тора, тигән дәғүәм дә юҡ.**



# ТАРИХ - КҮҘӘТЕҮСЕ...

## һәм ул үҙен белмәгәндәрҙе ҡаты язалай

Әңгәмәлә ҡатнашыусы хөрмәтле сәйәсмән ғалимдарыбыҙ Мансур Әюпов менән Әхтәр Боҫҡонов "Суверенитет беҙгә нимә бирҙе?" тигән һорауға: "Суверенитет иҡтисади һәм сәйәси үҙаллылыҡ шарттарында республикаға, уның халҡына, башҡорт халҡына ҙур бер баҫҡысҡа күтәрелергә мөмкинлек бирҙе", - тип яуаплай. Ошо фекерҙе тулыһынса хуплап, үҙемдең дә фекеремде әйтәм: суверенитет ҡаҙанышы бынан йөҙ йылға яҡын элек ата-бабаларыбыҙ яулаған Башҡортостан автономияһы ҡаҙанышына тиң. Өҫтәүенә, был ҙур тарихи еңеү башҡорттар тарихында тәүге тапҡыр ҡан түкмәйенсә, бер ниндәй ҡорбандарһыҙ, РФ һәм БР Конституциялары сиктәрендә, демократик алымдар менән тормошҡа ашырылды. Ошо ҡаҙаныш фонында фекер йөрөтөп, әңгәмәсе ғалимдарыбыҙ милләтте бер туктауһыҙ хәрәкәт итеүсе күренеш тип атай. Киләсәктә милләт фәҡәт үҙгәрештәр аша ғына үҫә аласаҡ. Беҙ бөгөн юл сатында һәм милләт артабан ни эшләргә тейеш, тигән һорау тыуа. Мәҫәлән, бөгөн туған телде һаҡлау проблемаһы бик киҫкен, хатта аяныслы тора. Ул юҫыҡта ниндәй саралар күрергә булыр ине?

Рәсәй халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, үҙ тарихын белмәй, тип уйлайым. Белергә ынтылыш та юҡ кеүек. 2012 йыл Рәсәйҙә "Тарих йылы" тип иғлан ителде ителеүен, ләкин Рәсәй халыҡтарының тарихын өйрәнер өсөн ниндәйҙер ижади эш башҡарылғанын шәйләмәнем. Ата-бабаларыбыҙҙың тарихҡа бик игтибарлы, ихтирамлы булғаны билдәле бит. "Урал батыр" эпосын ижад итә алған ата-бабаларыбыҙ менән ғорурланмау мөмкинме? Бер аҡыл эйәһе, В.Ключевский булһа кәрәк, былай тип яҙа: "Һаҡ булығыҙ! Тарих - уҡытыусы түгел, ул бер нимәгә лә өйрәтмәй. Ул күҙәтеүсе генә һәм тарихты белмәгәндәрҙе ҡаты язалай". Ошо һүҙҙәрҙән сығып фекер йөрөткәндә, беҙ, Рәсәй халыҡтары, үҙ тарихыбыҙҙы белмәгән өсөн дә мандып китә алмайбыҙҙыр ул, тип тә уйланыла.

Үткән быуаттың 80-се йылдарындағы башҡорт теленең хәлен хәтерләп, хәҙергеменән сағыштырһам, күңелдә ҡәнәғәтләнеү тойғолары уянып киткән һымаҡ. Ул саҡта Башкирия тип аталған, баштан-аяҡ ордендарға күмелгән СССР тигән илдең иң ҡеүәтле доноры булған республиканың башҡортса матур итеп һөйләй белгән бер генә ТВ дикторы - Рәсимә Кәримова ғына бар ине. Бөгөн беҙ башҡорт теленә дәүләт статусы бирелгән Башҡортостан тип аталған илдә йәшәйбеҙ. Тимәк, республика кимәлендә РФ һәм БР Конституцияларына ярашлы ике дәүләт теле эшләй булып сыға. Ә ысынбарлыҡ нисек һуң? Дөрөҫөн әйткәндә, башҡорт теле дәүләт теле статусын алһа ла, ғаилә һәм кухня теле булып ҡалыуын дауам итә. Әүәле башҡорт артистары сәхнәлә яттан башҡортса һөйләп, сәхнәнән төшкәс, татарса һөйләшһә, бөгөн урыҫса һөйләшә. Ни өсөн быуаттар буйына ошо илдә йәшәп, төп халыҡ телендә һаулыҡ һорашырға ла өйрәнмәгән кешеләр милләтселек, тиң хоҡуҡлылыҡ, толерантлыҡ тураһында һүҙ ҡуйырта? Ни өсөн башҡорт ҡына толерантлы булырға тейеш? Күрәһегеҙ, һорауҙар күп, яуаптар ғына юҡ. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы - республиканың дәүләт теле булған башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү эшенә тотонорға кәрәк. Бөгөн! Иртәгә түгел.

Был тарихи мөһим эште мин ике өлөшкә бүлеп ҡарайым:

- Мәктәпкә барыусы бала үҙ йәше кимәлендә башҡорт тарихын (әкиәттәр аша), уның бер нисә арҙаҡлы шәхесен (С.Юлаев, Ә.Вәлиди, Ш.Бабич, Р.Ғарипов) белеп, мәктәп тупһаһы аша үткәндә "Мин - башҡорт" тип әйтерлек кимәлдә туған телен белергә тейеш. Был эште атай-әсәй, ҡартатай-ҡәртәсәй, олатай-өләсәй, ғаилә ағзалары ғына эшләй ала.

- Башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ ҡулланыу даирәһен киңәйтә барыу. Дәүләт идараһы системаһында эшләүсе хеҙмәткәрҙәр ике телле булырға тейеш. Миненсә, бөгөн яуаплы хеҙмәткәрҙәргә эшкә алыу ябайлаштырылған. Эшкә килеүсенең дипломы булһа, күп һәм матур итеп һөйләй белһә - шул еткән. Бөгөн яуаплы юғары вазифаларға халыҡҡа, илгә, дәүләткә хеҙмәт итеү өсөн түгел, ә власть, аҡса һәм дан алыу өсөн килеүселәр күбәйҙе. Рәсәй өсөн был бик ҡурҡыныс күренеш. Боронғо бер ғалим Сократ хаҡындағы яҙмаһында: "Сократ вселял в своих последователей прежде всего мудрость, а лишь затем умение говорить и действовать. Ибо те, кто умеет говорить, не имея мудрости, наиболее несправедливы и наиболее способны творить зло", - тип яҙған. Төрлө кимәлдәге етәксе шәхестәрҙең ил яҙмышында, халыҡ-милләт яҙмышында ла роле баһалап бөткөһөҙ яуаплы һәм ҙур. Кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте лә йәмғиәттең имен булыуына, бәхетле йәшәйешенә тәьҫир итә бит. Ҡайһы бер ил ғалимдарының кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен рухи мәҙәниәт тип таныуы юҡҡа түгел.

Бөгөн республика Хөкүмәте инвестициялар йәлеп итеүгә ҙур иғтибар бирә. Әлбиттә, был кәрәк. Әммә йәмғиәт, кешеләр йәшәйешенең нигеҙ ташы булған рухи байлыҡ, иман, әҙәп кимәле кәмей бара һымаҡ. Ул төшөнсәләргә лә инвестициялар кәрәк бит. Башҡортостанда күпселек мосолмандар йәшәй, һуңғы йылдарҙа мәнәрләрән мәсеттәр төҙөлдә. Әммә ислам диненең изге тәғлимәттәре мосолмандарға бик ауыр барып етә бит. Сөнки йәмғиәттең нигеҙ ташы булған ғаилә институты тарҡалыуын дауам итә, етем балалар һаны арта, никахтан тыш бала табыу ғәҙәти күренешкә әйләнде, граждандыҡ никахы тигән мәғәнәһеҙ ғаилә ҡороу формаһы барлыҡҡа килде. Республикала күпселек мосолмандар йәшәһә лә, мөфтөй Тәлғәт Тажетдин дини вәғәздәрен урыҫса һөйләй. Ни өсөн ул Башҡортостандың икенсе дәүләт телен һанға һуҡмай? Ғөмүмән, ошо кимәлдәге мөфтөйҙәр, белемле дин әһелдәре бөгөн халыҡ араһында күберәк булырға, баш ҡалала, байрам унайынан ғына түгел, ә йышыраҡ, ауылдарға сығып та вәғәздәр уҡырға тейеш.

Бөтә Рәсәйгә ҡурҡыныс менән янаған коррупция-урлашыу тураһында ла фекерем бар. Хәтерегеҙҙәләр, элекке президент Д.Медведев коррупцияға ҡаршы иң һыҙғанып көрәште бит. Һеҙәмтәлә, 2011 йылда бер ришүәттең уртаса хаҡы 238 мең һумға тиклем артты, был 2010 йыл менән сағыштырғанда дүрт тапҡырға күберәк. Тимәк, ни хәтле "ҡаты" көрәшһәң, шул хәтлегә арта коррупция тигән ғәләмәт. Ни өсөн?

Ошо һорауға яуап бирер алдынан бер мәҙәк хәлде бәйән итәйем әле. Борон заманда бер ауылда Сөләймән атлы атаҡлы бур йәшәгән. Ул урлашып ғүмер итеп, 50 йәшен тултырған. Гонаһҡа батҡан Сөләймән бер саҡ аҡылына килеп, выждан ғазабы кисерә башлай, әммә һаман да урлашыуынан тыйыла алмай. Шунан тәүбәгә килергә уйлап, ауыл хәҙрәте Зиннәткә килгән.

- Ҡартайҙым, Зиннәт хәҙрәт, гонаһҡа баттым, урлашыуҙан һис тыйыла алмайым. Миңә нимә эшләргә хәҙер? - тип мөрәжәғәт итә ул хәҙрәткә.

- Эй, Сөләймән ҡустым, һиңә бының өсөн иң тәүҙә урлашыуҙан түгел, алдашыуҙан тыйылырға кәрәк, - ти уға Зиннәт хәҙрәт.

Хәҙрәткә рәхмәт әйтеп ҡайтып китә Сөләймән. Хәҙрәт мине урлашыуҙан түгел, алдашыуҙан тыйҙы, тимәк, урлашыу гонаһ түгел, тип, шул көндән кисендә үк элекке кәсебенә юллана был. Урам аша сығып барғанда уға күршеһе осрай һәм ҡайҙа юл тотоуын һораша. Алдашыуҙың гонаһ икәнлеген аңлаған Сөләймән, бер һүҙ ҙә әйтмәйенсә уйланып тора ла, тәүге тапҡыр буш ҡул менән өйөнә ҡайтып китә. Ошонан һуң ул урлашыуҙан бөтөнләйгә тыйыла...

Ә бит коррупцияның нигеҙе фәҡәт алдашыуҙа. Алдашыуға нигеҙләнгән урлашыу һәр бер кешенең, бөтә йәмғиәттең рухи һәм әхләҡи тарҡалыуына килтерә. Һөҙөмтәлә кешеләр власҡа ла, законға ла ышанмай башлай.

"Киске Өфө"лә хөрмәтле ғалимәбеҙ Зәйтүнә Шәрипова бик аҡыллы фекер әйтте: "Кешегә һәр ваҡыт, бигерәк тә виртуаль донъя заманында, үҙен иштетереүсе, борсоған хистәрен уртаҡлашыусыны табыуы ауыр. Оратор-мотиватор тигән һөнәр бар икән. Ул һөнәр эйәһе матур һүҙҙәре менән кешене ылыҡтыра, күңелен күтәрә, дәртләндерә. Яҙыусыларҙың бурысы - тап ана шул оратор-мотиватор ролендә сығыш яһау, ижад итеүҙер..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"...Беҙ бөгөн юл сатында. Милләт артабан ни эшләргә тейеш?" тигән һорау ҡуя профессор Мансур Әюпов юғарыла әйтеп үткән әңгәмәлә. Уға әйәреп, мин дә шуны ҡабатлайым: юл сатында оҙаҡ баҫып тороу хәүефле. Шулай булғас, дөрөҫ йүнәлеш табып, әкренләп булһа ла алға атлау хәйерле...**

**Сәмерхан ҠУНАФИН,**
**һуғыш һәм хеҙмәт ветераны.**
**Сибай ҡалаһы.**

АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР

# ФИҘАҠӘР ҒАЛИМӘ



**Был көндәрҙә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе булып филология фәндәре докторы дәрәжәһенә күтәрелгән тел белгесе Нәжибә Мәҡсүтованың тыуыуына 80 йыл киң билдәләнә.**

XX быуаттың 70-се йылдарында Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәҡсүтова бик ҙур ғилми хеҙмәт өҫтөндә эшләй. Ысынлап та, башҡорт теленең көнсығыш диалектын, уның һөйләштәрен, һөйләшсәләрен өйрәнеү теоретик эҙләнеүҙәргә, экспедицияларҙа тупланған тел мәғлүмәттәренә төплө аңлатмалар биреүҙе талап итә. 70-се йылдарҙан башлап уның ошо өлкәләге мәҡәләләре бер-бер артлы баҫылып тора. Һөҙөмтәлә, 1976 йылда ғалимәнең "Башҡорт теленең көнсығыш диалекты сағыштырма-тарихи яҡтыртыуҙа" исемле оло хеҙмәте Мәскәүҙең "Наука" нәшриәтендә донъя күрә. Китабында ғалимә көнсығыш диалектының бөтә һөйләштәренә лә тулы байҡау яһай, уларҙың һәр береһенә этногенез, лексика, фонетика, морфология күҙлегенән анализ биреүгә өлгәшә. Был хеҙмәт бөгөн дә төркиәттә үҙенең әһәмиәтен юғалтмаған, сөнки ул һаман да диалектология буйынса яҙылған хеҙмәттәрҙең классик өлгөһө булып ҡала.

Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙына новаторлыҡ идеялары ла хас ине. 1972 йылда Н.Х. Мәҡсүтова етәкселегендәге төркөм яңы тема - "Башҡорт теленең диалектологик атласы" проекты өҫтөндә эш башлай. Уға мәғлүмәт йыйыу 1973 йылдан 1982 йылға тиклем алып барыла, 400 терәк пункты билдәләнә, уларға аңлатмалар бирелә. 1983 йылда Н.Х. Мәҡсүтова СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Президиумында "Башҡорт телен лингвогеографик күҙлектән өйрәнеү (диалектологик атлас): 1973 - 1983 й.й." тигән доклад менән сығыш яһай. 1986 йылдың башына "Башҡорт теленең диалектологик атласы" өҫтөндәге эш тамамлана. Әммә ул бары тик 2005 йылда ғына нәшер ителә.

Н.Х. Мәҡсүтова шул уҡ йылдарҙа бер юлы "Европаның лингвистик атласы" тигән тема өҫтөндә лә эш башлай. Уның өс өлөштән торған беренсе томының мөхәррирәт коллегияһы исемлегендә беренсе булып Н.Х. Мәҡсүтова тора.

Н.Х. Мәҡсүтова етәкселек иткән өсөнсө абруйлы проект - "Төрки телдәренең диалектологик атласы". Был проект Совет төркиәтселәре комитеты етәкселегендә тормошҡа ашырылды, әммә Советтар Союзы тарҡалыу менән уның буйынса эш тоткарланып ҡалды. Моғайын, был проект терҙелеү менән уның башҡорт өлөшө буйынса башҡарылған эштәр ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалмаҫ.

1981 йылда Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәҡсүтова Баҡыла докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. Артабан РФ Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының диалектология һәм топонимика бүлегенә етәкселек итә. Ошо осорҙа ул байтаҡ ғилми йыйынтыҡтарҙың төҙөүсеһе һәм яуаплы мөхәррире була. Шулай уҡ ошо осорҙа уҙғарылған саралар һәм нәшер ителгән китаптарҙың барыһы ла тиерлек төркиәт диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләренә бағышлана.

1996 йылда Н.Х. Мәҡсүтованың "Башкирские говоры, находящиеся в иноязычном окружении" исемле монографияһы донъя күрә. Ул да бик уникаль хеҙмәт һанала, сөнки унда Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарҙың тел үҙенсәлектәре тулыһынса тасуирлана.

Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы етәкселегендә биш фән кандидаты әҙерләнә. Улар - М. И. Дилмөхәмәтов, У.Ф. Нәҙерғолов, Э.Ф. Ишбирҙин, Ю.В. Псәнчин, М.Ғ. Усманова. Ошо исемлектәге һуңғы өсәү бөгөн - фән докторҙары.

Фәнни ҡаҙаныштары өсөн Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәҡсүтова 1983 йылда "БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була. Ул төрлө йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Терминология комиссияһына етәкселек итте, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе булды. Ваҡыт һәм һаулыҡ талап иткән был вазифаларҙы Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы ҙур яуаплылыҡ менән башҡарҙы. Ғалимәнең тыуыуына 80 йыл тулыуҙы билдәләгәндә киләсәк быуынға уның бөйөк шәхес икәнлеген төшөндөрөү хәстәрлеген дә иҫтән сығармайыҡ.

**Юлай ПСӘНЧИН,**
**профессор, филология фәндәре докторы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# АЛДЫҠ - УЛ ШИКЛӘНЕҮ

**Әбү Мөхәммәт Талиб Аллаһ Илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйләгәндәрҙән ишеткән һүҙҙәрҙе әйтеп ҡалдыра: "Шик тыуҙырған нәмәләрҙән баш тарт. Ысынлап та дөрөҫлөктә генә тынyслыҡ, ә алдыҡ - ул шикләнеү".**

Хәҙистең тәфсире. Әхмәд бин Ханбалдың "Мөснәд"ендә яҙылғанса, хаҡ Хәсәндән: "Бәйғәмбәр әйткәндәрҙән иҫеңдә нимә ҡалды?"- тип һорағастар, ул ошо хәҙисте килтергән. Шикле нәмәне айыра белеү өсөн диндар йөрәк тауышына ҡолаҡ һалырға тейеш. Дөрөҫлөк уға тынyслыҡ бүләк итер, алдыҡ күңел тынысһыҙлығы килтерер. Ошо уҡ хәҙистең икенсе вариантында Бәйғәмбәрҙән (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Шик тыуҙырған нәмәне нисек айыра алырмын?"- тип һорағандар. Ул былай тип яуап биргән: "Ҡулыңды йөрәгенә һал. Тыйылғандан ул берсә лепелдәр, берсә тымыр, ә рөхсәт ителгәндән йөрәк тынысланыр".

Хаҡ инаныу ихлас ышаныу талап итә. Ихлас ышанып әйтелгән һүҙҙәр йә ҡылынған эштәр дөрөҫ булыу-булмауында шик тыумаҫҡа тейеш. Шикләндергән нәмә менән булышыу хәрәм сигендә тороуҙы аңлата, унан баш тартыу - төпһөҙ упҡын ситенән артҡа сигенеүгә тиң.

Бигерәк тә бөгөнгө көндә ялған азатлыҡ рөхсәт ителгән һәм тыйылған нәмәләр араһындағы айырманы йыуып бөтөрөп барғанда, шикле әйберҙәргә сетерекле ҡараш "хәләл" һәм "хәрәм" төшөнсәләрен һаҡлап ҡалырға ярҙам итә. Шиктәрҙән арыныу мосолмандарҙы гонаһ ҡылыуҙан һаҡлай.

### Хәҙистән алынған дәрестәр

**1)** Хәрәмдән һаҡланыу өсөн шикле нәмәләрҙән алыҫ торорға, тик хәләл - дин рөхсәт иткән эштәр ҡылырға кәрәк.

**2)** Мосолман йөрәге ҡабул итмәгән нәмәләргә һаҡ ҡарарға, күңеленә хуш килмәгәндә башҡармаҫҡа тейеш.

**3)** Диндар мосолмандар оло гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡа, кеселәренән йыраҡ йөрөй.



БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# АТЛЫЛАРҘЫҢ ЯУ ЮЛЫ

**1812 йылғы Ватан һуғышы 24 июндә башлана. Ырымбурға хәбәр бер айҙан һуң, 25 июлдә, барып етә. 6 июль көндө Александр беренсе ополчение туплау тураһында Манифест сығара. Шул уҡ көндө Манифест Ырымбур губернаторы канцелярияһында төрки теленә ауҙарылып, кантондарға таратыла һәм мәсеттәрҙә муллалар тарафынан уҡылып, халыҡҡа иғлан ителә.**

Хәҙерге Учалы районы биләмәһендә йәшәгән халыҡ ете полк төҙөүҙә ҡатнаша. Ул 3-сө, 4-се, 14-се, 18-се башҡорт, 1-се, 2-се типтәр һәм 2-се мишәр полктары була. 3-сө полк һуғышҡа Ырымбур гарнизон полкы подполковнигы Тихановский бригадаһы составында ҡуҙғала. Полктар йыйылыу пункты булған Түбәнге Новгородҡа барып еткәнсе генә бригадаларға берләштерелә. Артабан улар армиялар составына индерелә. Полк Һамар, Сембер, Арзамас аша Түбәнге Новгородҡа барып етеп, 18 сентябрҙә генерал-лейтенант П.Х. Витгенштейндың 1-се Айырым корпусы составында Полоцк тарафына юл тота.

Октябрь айында Рәсәй ғәскәре контрһөжүмгә күсә. П.Х. Витгенштейн корпусындағы башҡорт кавалерияһы был ваҡытта маршал Макдональд армияһының сигенеүенә ҡаршы тора. Һуңынан 3-сө полк генерал-адъютант кенәз П. Волконский отрядына күсерелә һәм Смоленск яғынан ынтылған дошман ғәскәрҙәренән Торопц, Белый, Сычовка ҡалаларын һаҡлауҙа ҡатнаша. Ноябрҙә йәнә П. Витгенштейн корпусына ҡушылып, Витебск ҡалаһында тәртип һаҡлау бурысын үтәй. Полк 1813-1814 йылғы походтарҙа ҡатнашмай. Уның бер өлөшө Гроднола гарнизон хеҙмәтендә була, бер өлөшө Минск ҡалаһына эсирҙәрҙе оҙатып йөрөй.

14-се башҡорт полкы 1813 йылдың ғинуар айында Сембер ополчениеһына ҡушылып, Волынский губернаһына табан йүнәлә. Ә майҙа Польша еренә аяҡ баҫа. Көҙ башында Германия биләмәләрендә генерал Л. Л. Беннигсен армияһының һул фланг корпусы составында генерал-лейтенант граф П.А. Толстой командованиеһы аҫтында һуғыша, шул иҫәптән Лейпциг яуында ҡатнаша. Һуңғыһында Насир Абдуллин, Ғәликәй Ташбулатов, Абдулла Сурағолов айырыуса батырлыҡ күрһәтеп, ордендар менән наградлана. Аҙаҡтан полк Дрезден ҡалаһында ҡаты яуҙар алып бара. Артабан Кельн аша үтә һәм Ырымбур казактары, Ставрополь полкындағы ҡалмыҡтар менән бергә Берлинды алыуҙа ҡатнаша. Бынан һуң башҡорт атлылары Дон, Ырымбур казактары менән А.Н. Сеславиндың партизан отрядында хәрби операциялар атҡара. Отряд Париж эргәһендә төп армияға ҡушыла, ә һуғышты Мелән ҡалаһын штурмлау менән тамамлай. 14-се полктың 87 яугирына күрһәткән батырлыҡтары өсөн икешәр көмөш миҙал бирелә.

Атап үтелгән ике полк Верхнеуральск өйәҙе башҡорт яугирҙарынан туплана, 4-се полк Троицк, Силәбе, Өфө өйәҙендә йәшәгән башҡорттарҙан төҙөлә. Улар шулай уҡ Лейпциг яуында, 14-се полк менән бергә Дрезден ҡалаһы эргәһендә һуғыша. Ул яуҙа Килдейәр Байбулдин, Аҫылғужа Бакиров ҙур батырлыҡтар күрһәтә. 49 яугир поход старшинаһы А. Бакиров етәкселегендә П.Витгенштейн кавалерияһы конвойында булып, тантаналы рәүештә Парижға инә. А. Бакиров 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены менән наградлана.

18-се полк иһә тулыһынса Троицк өйәҙе башҡорттарынан туплана (Учалы районының төньяҡ өлөшө - ҡыуаҡан, ҡара табын, барын табын ырыуҙары). 1813 йылдың ғинуар айында Рязан ополчениеһына ҡушыла. Һуңынан кенәз Д.И. Лобанов-Ростовскийҙың Резерв армияһы составында була.

**Фәнүр ШАҺИЕВ.**

***✓ Эштә уңыш яулау өсөн шәхси тормоштоң да яҡшы булыуы шарт. Был йәһәттән дә уңдым мин. Тормош иптәшем һәр саҡ мине аңлап, бар башланғыстарымды йөпләп, яйлап, ярҙам итеп торҙо.***

**Фотоһүрәт - айырым кешенең, ғаиләнең һәм тотош илдәрҙең тарихын сағылдырған һәм киләсәк быуындарға бәйән иткән өнһөҙ шаһит ул. Кешелектең иң ғәжәйеп тә, иң мауыҡтырғыс та, шул уҡ ваҡытта барыһына ла аңлайышлы булып тойолған был өлкәһе үҙендә бик күп серҙәр һаҡлай. Был хаҡта тик ошо һөнәрҙең уртаһында ҡайнап йәшәгән, тормошон һәм йәшәйешен фотоаппараттан айырып ҡарамаған кеше генә һөйләргә мөмкин. Шундайҙарҙың береһе Әбйәлил районы Асҡар ауылында йәшәүсе Зәйтүнә Әнүәр ҡыҙы СӘҒИТОВА. Оҙаҡ йылдар тотош райондың алыштырғыһыҙ фото төшөрөүсеһе булған Зәйтүнә Әнүәр ҡыҙы менән бөгөнгө әңгәмәбеҙ тылсымлы һәм серле фотоһүрәттәр донъяһы хаҡында булыр.**

## Тормоштоң һәр боролошон яҡшыға юра

Фотоһүрәт төшөрөү өлкәһенә мин осраҡлы ғына килеп эләктем. Бала саҡтан һүрәт төшөрөргә яраттым һәм киләсәктә үҙемде рәссам итеп күрҙем. Магазиндарҙа тапмағас, һүрәт төшөрөү өсөн махсус буяу, бумалаларҙы төрлө журналдар аша яҙҙырып ала инем. Яҡындарымдың да был шөғөлөмдө гел хуплап-яҡлап ҡына тороуы ошо өлкәгә башкөллө сумырға мөмкинлек биргәндер, тим. Мәктәпте тамамлағас, хыя-

## Уҡытыусымдан, ғаиләмдән уңдым

Асҡарҙа мин Александр Яковлевич Лаврёнов етәкселегендә 16 йыл эшләнем. Ул мине был һөнәрҙең бөтә нескәлектәренә өйрәтте, ғөмүмән, ысын оҫта итеүгә ҙур көс һалды. Уҡыуҙы тамамлап, яңы ғына эш башлаған һәр кеше максималист була. Ул донъяны үҙгәртеренә, уны үҙе теләгәнсә ҡора алыу мөмкинлегенә, һөнәрендә лә быға тиклем бер кем күтәрелә алмаған бейеклектәргә күтәрелеүенә ышана. Үҙ-үҙеңә ышаныу, әлбиттә, кәрәк, ләкин бер тапҡыр ҙа ауыр һүҙ ишетмәнем, ризаһыҙ йөҙөн күрмәнем. Әле булһа ул минең иң ныҡлы терәгем, ярҙамсым һәм кәңәшсем. Балаларым да һәр саҡ минең таянысым булды.

## Эшҡыуарлыҡ - оло һынау

СССР дәүләте тарҡалып, илдәге үҙгәрештәр мин эшләп йөрөгән комбинатҡа ла ҡағылмай ҡалманы. Көндәрҙең береһендә директорыбыҙ Юнир Шакир улы Әхмәтйәнов 80 кешенең ҡулына эштән бушатыу хаҡында белдергән ҡағыҙ тотторҙо. Шулай итеп, бер минут ҡыуарлыҡ - оло һынау. Барыһына ла яйлап өйрәнергә, эшҡыуарлыҡ тигән диңгеҙҙең бар әсе-сөсөһөн татырға тура килде. Шулай ҙа үкенмәйем, һәр эштең дә үҙ ауырлығы һәм яҡшы яҡтары була. Үҙ эшеңдән ҡәнәғәтлек тапһаң, шөғөлөң күңеленә оҡшаһа, бар ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығырға мөмкин.

## Фото төшөрөү - ул ижад

Фоторәссам булып эшләй генә башлаған ваҡыттарҙы хәҙерге заман менән сағыштырырлыҡ түгел. Ауыр фотоаппараттарҙы күтәреп йөрөү, ҡараңғы бүлмәләрҙә пленкаларҙы баҫтырыу, уларҙың сифаты өсөн борсолоуҙар, ғөмүмән, хәҙерге шарттарға яҡын да килмәй ине ул саҡтағы эш алымдары. Бөгөнгө фотографтар күпме теләй, шунса кадр эшләй. Шулай уҡ фотолар баҫыуҙың да бер ауырлығы ла юҡ. Ҡулдың бер-нисә йөрөшө ярҙамында сағыу, күркәм, матур фотоһүрәттәр эшләп була. Бының өсөн ҡул аҫтында һәйбәт фотоаппарат һәм компьютер ғына булыуы шарт. Шулай ҙа элекке ваҡыттағы фото төшөрөү процесы һағындыра, сөнки улар нисектер йәнлерәк кеүек тойола ине. Хәҙер камераларға төшөрөлгән фотоһүрәттәр музей экспонаттарына әйләнде инде. Уларға ҡараһаң, шул ваҡыттағы яҡты тойғолар менән осрашаһың. Ул саҡта кеше үҙе лә фото төшөү процесына яуаплыраҡ ҡараны, фотостудияға ҙур әҙерлек менән, ниндәйҙер байрамға килгән кеүек килә ине. Бөгөн иһә һәр кемдең ҡулында фотоаппарат, кем нисек теләй, шулай мәңгеләштерә үҙен. Әлбиттә, ғүмерҙең ҡабатланмаҫ миҙгелдәрен иҫтә ҡалдырыу өсөн фотоһүрәттәр бик ярҙам итә, шулай ҙа фотоға төшөрөү, минеңсә, ҡәҙимгелеккә әйләнмәҫкә тейештер ул. Ҡулына фотоаппарат алған һәр кем үҙендә оло яуаплылыҡ тойоп, бар күңелен биреп, йөрәген һалып эшләгәндә генә киләсәктә барыһын да ҡыуандырыр, уйға һалыр, яҡты иҫтәлектәргә сумыу мөмкинлеге биргән фотоһүрәттәр эшләргә мөмкин. Фотоға төшөрөү - ул ижад һәм уға ошо күҙлектән сығып ҡарамаған кеше сифатлы һөҙөмтәгә өлгәшә алмаясаҡ.

## Фоторәссамдың төп ҡоралы - фотоаппарат

Мин үҙемдең эш ҡоралыма - фотоаппаратыма бик иғтибарлымын. Утыҙ йыл эсендә күп фотоаппарат алмаштырһам да, эш урынымдың иң түрен тәүге фотоаппаратым биләй. Ул минең өсөн йәнһеҙ ҡорамал түгел, ә тиҫтәләгән йылдар эсендәге төрлө ваҡиғаларҙы үҙенә һыйҙырып, хәтирәләр бүләк итеүсе ғаилә ағзаһы кеүек. Минең менән бергә әллә күпме юлдар үтеп, бихисап кешене, тәбиғәт күренештәрен, байрам-кисәләрҙе, йыйылыштарҙы, төрлө быуын кешеләрен "күргән", уларҙың хис-тойғоларына шаһит булған тере йән эйәһе. Әлеге ваҡытта минең бер-нисә фотоаппаратым бар. Уларҙың һәр береһе минең эшемдә ҙур роль уйнай. Фотоаппаратҡа минең төп талабым - уның ышаныслы булыуы һәм теүәллек. Аппарат системаһының теүәл эшләүе оло әһәмиәткә эйә, сөнки фотоаппарат төҫтәрҙе, һыҙаттарҙы һәйбәт, аныҡ һәм дөрөҫ сағылдырырға тейеш. Эш процесында мин камераның эшләү-эшләмәүе хаҡында бөтөнләй уйламаҫҡа тейешмен, сөнки сәғәт кеүек теүәл эшләгән фотоаппарат ҡына фотографтың яҡын дуҫына әйләнә. Ижади яҡтан ҡарағанда, фотоаппарат минең өсөн яҙыусыға - ҡәләм, музыкантҡа - уйын ҡоралы, рәссамға - бумала кеүек. Бында төп талапты мин ҡуям, ә фотоаппарат шуны үтәй. Әлбиттә, фотоапараттан бик күп нәмә тора, ләкин ижади процестың хужаһы - мин үҙем. Фотоаппарат менән фоторәссам ошондай ракурста "һөйләшкәндә" генә улар бер-береһен аңларға мөмкин.

# ФОТО ТӨШӨРӨҮ – ДИАЛОГ,

## ижади эшмәкәрлек һәм мауыҡтырғыс шөғөл



лымды тормошҡа ашырыу маҡсатында рәссам-биҙәүсе һөнәрен үҙләштереү өсөн Магнитогорск ҡалаһындағы училищеға барҙым. Ләкин художество мәктәбендә был йүнәлеш буйынса төплө белем алған ҡала балалары менән тылсымлы ла, ҡатмарлы ла рәссам донъяһына үҙаллы ғына үтеп инергә тырышҡан ауыл балаһы араһында айырма күк менән ер араһы ине - уҡырға инә алманым. Ул ваҡытта фотограф һөнәре бик популяр ине, шуны иҫәпкә алып, ошо уҡ ҡалалағы 55-се һөнәрселек училищеһына барҙым һәм фотограф һөнәрен үҙләштерҙем. Магнитогорск ҡалаһында бер аҙ эшләгәс, тыуған районыма эшкә ҡайттым һәм Асҡарҙағы халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү комбинатында оҙаҡ йылдар фотограф булып эшләнем. Шулай итеп, рәссам-биҙәүсе булам тигән хыялым тормошҡа ашмаһа ла, Хоҙай миңә үҙемде икенсе өлкәлә табырға мөмкинлек бирҙе.

Тормош юлдарының ҡырҡа боролоштар яһап, бөтөнләй уйламаған яҡтарға алып китеү ғәҙәте бар. Кем өсөндөр был боролоштар үкенесле һәм кире тойғолар ҡалдырһа, шәхсән минең өсөн тормош һуҡмағымдың ошо юҫыҡҡа йүнәлеүе ғүмерлек һөнәремә әйләнгән фотоһүрәттәр донъяһына алып килде. Минеңсә, тормоштоң һәр боролошон тик яҡшыға ғына юрарға кәрәк һәм яҡшыға өмөт иткәндә барыһы ла һин теләгәнсә буласаҡ. Үҙемдең һөнәремде бик яратам һәм бына 30 йылдан ашыу ошо матурлыҡ һәм гүзәллек сорналышында йәшәйем, эшләйем. Эшеңдән бәхет табыу өсөн уны яратырға, бар күңелеңде һалып, йөҙөп йөрөп эшләргә кәрәк. Был яҡтан мин бәхетле, көн дә иртән эшкә байрамға барған кеүек барам.

***Бөгөн иһә һәр кемдең ҡулында фотоаппарат, кем нисек теләй, шулай мәңгеләштерә үҙен. Әлбиттә, ғүмерҙең ҡабатланмаҫ миҙгелдәрен иҫтә ҡалдырыу өсөн фотоһүрәттәр бик ярҙам итә, шулай ҙа фотоға төшөрөү, минеңсә, ҡәҙимгелеккә әйләнмәҫкә тейештер ул. Ҡулына фотоаппарат алған һәр кем үҙендә оло яуаплылыҡ тойоп, бар күңелен биреп, йөрәген һалып эшләгәндә генә киләсәктә барыһын да ҡыуандырыр, уйға һалыр, яҡты иҫтәлектәргә сумыу мөмкинлеге биргән фотоһүрәттәр эшләргә мөмкин. Фотоға төшөрөү - ул ижад һәм уға ошо күҙлектән сығып ҡарамаған кеше сифатлы һөҙөмтәгә өлгәшә алмаясаҡ.***

һәр аҙымын үлсәнгән һәм уйланған булырға тейеш. Александр Яковлевич миңә быны яҡшы аңлатты. Ғөмүмән, ул мине һауанан ергә төшөрҙө, ләкин был процесс минең өсөн ауыртыу-үкенеүһеҙ генә тормошҡа ашырылды. Мин уны тәүге уҡытыусым, кәңәшсем булараҡ әле булһа оло хөрмәт менән иҫкә алам.

Эштә уңыш яулау өсөн шәхси тормоштоң да яҡшы булыуы шарт. Был йәһәттән дә уңдым мин. Тормош иптәшем һәр саҡ мине аңлап, бар башланғыстарымды йөпләп, яйлап, ярҙам итеп торҙо. Элек фотолабораторияларҙа төнгә тиклем эшләй инек, шул ваҡытта ла унан эсендә тиҫтәләгән кеше эшһеҙ тороп ҡалды. Улар араһында фотограф, тегеүсе, сәс алыусы, сәғәт, аяҡ кейеме йүнәтеүселәр һәм башҡа һөнәр эйәләре бар ине. Ауыр кисерҙек, әлбиттә, был ваҡиғаны, ләкин тормош дауам итә, артабан йәшәргә кәрәк. Юнир Шакир улы беҙгә һалым инспекцияһына барып иҫәпкә торорға һәм үҙ аллы эшләй башларға кәңәш бирҙе. Эшҡыуарлыҡ хаҡында беребеҙ бер нәмә белмәй, уның ниндәй булыуын беребеҙ ҙә күҙ алдына килтермәй ҙә, аңламай ҙа ине. Шулай итеп, беҙ сараһыҙлыҡтан эшҡыуар булып киттек. Кемдер был өлкәлә оҙаҡ тотҡарланманы, ә мин бына 20 йылға яҡын эшҡыуармын. Эш-

## Һәр кем профессиональ фоторәссам була аламы?

Һәр өлкәлә лә конкурентлыҡ була, был - тәбиғи. Мин эшләгән өлкә лә ҡағиҙәнән ситләшмәй. Кемдер үҙе, яҡындары өсөн генә фоторәссам булһа, икенселәр фотоаппаратты эш ҡоралына әйләндерә һәм күпләп аҡса эшләй башлайым тип

уйлай. Ләкин фото төшөрөүгә бары тик килем алыу шөғөлө итеп кенә ҡараусыларҙың хыялдары тиҙ үк емерелә. Билдәле фотограф Юзеф Карш әйтеүенсә, "Ысын фоторәссам булыу өсөн күңел күҙе менән ҡарарға өйрәнергә кәрәк, сөнки фотокамераның төп объективы - ул йөрәк һәм күңел". Ысынлап та, фоторәссам күренеште, әйберҙе, кешене, предметты башҡа берәү ҙә күрә алмаған кеүек күрә белергә тейеш. Был профессия кешеләре донъяға үҙҙәренә генә хас айырым ҡараш аша баға. Нәҡ ошондай ҡарашлы кеше генә сифатлы, кеше ышанырлыҡ фотоһүрәт эшләргә мөмкин. Ә фотоһүрәттәр донъяһын бары тик фотоаппараттың бер төймәһе һәм объективы итеп кенә ҡабул итеүселәр, был эшкә күңел йылыһын һалмағандар ысын фоторәссам була алмай. Тора-бара ундай фотографтарҙан кеше лә ситләшә, сөнки уларҙың фотоһүрәте арбамай, һоҡландырмай. Фотоһүрәткә әләнән-әле ҡарағы килеп торорға тейеш, ә бер генә күҙ һалып, һандыҡ төбөнә һалып ҡуйылған фотоһүрәт камиллыктан йыраҡ тора, тип әйтергә була. Ысын фоторәссам үҙенең эше менән йәшәргә, янырға тейеш.

Шулай уҡ фоторәссамдың үҙ клиентына һәр ваҡыт итәғәтле, мөләйем, иғтибарлы булыуы, хөрмәт менән ҡарауы ла мотлаҡ. Фотостудияға килгән кешенең теләген иҫәпкә алып эшләү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Ҡайһы берәүҙәр фотоһүрәттә насар, йәмһеҙ сығам, тип ҡайғыра. Бында эш кемдәндер йәмһеҙ булыуында түгел (донъяла, ғөмүмән, йәмһеҙ кешеләр булмай), ә фоторәссамдың үҙ эшенә бармаҡ аша ҡарауында, уның профессиональ булмауында, тип әйтер инем. Мин, мәҫәлән, туй, тыуған көн йәки тәбиғәт фонындағы фотосессияларға ғына түгел, хатта паспорт йәки башҡа документҡа төшкән рәсми фотоһүрәттәрҙе эшләүгә лә ҙур иғтибар бирәм. Кемдер үҙ эшмәкәрлеген күберәк фото төшөрөп, тиҙерәк аҡсаһын арттырыуға йүнәлтһә, мин иһә һәр кешенең индивидуаллегенә иғтибар итәм. Ҡайһы саҡта 200-ләп кадр эшләп тә, улар араһынан өс-дүртәүһен генә һайлап алған саҡтар була. Минеңсә, һәр өлкәлә үҙ эшеңдең оҫтаһы булыу мотлаҡ.

Шулай уҡ тәбиғәт тарафынан бирелгән талантттың булыуы ла ҙур роль уйнай. Һәр кем профессиональ рәссам йәки йырсы була алмаған кеүек, теләгән кеше профессиональ фоторәссам бейеклегенә күтәрелә алмайҙыр ул, тип уйлайым.

### Сифатлы фотоһүрәттең нигеҙе - үҙ эшеңде яратыу

Фоторәссам өсөн барыһы ла мөһим. Яҡтылыҡ, тыуҙырылған шарттар, фон, фотографтың үҙенең күңел торошо - барыһы ла һәйбәт, сифатлы һәм барыһына ла оҡшаған фотоһүрәт эшләүгә йүнәлтелгән. Һәр фотографтың яратҡан һәм күңеле ятып бөтмәгән өлкәһе була. Кемдер портрет төшөрөргә яратмай, икенселәр тәбиғәтте үҙ итмәй, өсөнселәр иһә бары тик хайуандарҙы һәм тәбиғәт күренештәрен генә һынландыра, һәм башҡалар. Үҙемә килгәндә, төрлө фотоһүрәттәр эшләйем, ләкин иң оҡшағаны - тәбиғәттә эш итеү. Ә бына төрлө мәжлестәрҙә эшләүҙе өнәмәйем.

Шулай уҡ фотографтар төҫтәр менән эшләүгә лә ҙур иғтибар бүлә. Кемдер аҡ-ҡара фотоно ғына үҙ итһә, икенселәр тик төҫлөһөн генә һанлай. Бөгөн күберәк төҫлө фотоға өҫтөнлөк бирелә, ләкин фотографтар ҙа, кеше үҙе лә яңынан аҡ-ҡара төҫтәге фотоһүрәткә ҡайта башланы. Миңә лә аҡ-ҡара фотоһүрәттәр эшләү оҡшай, сөнки уларҙан ниндәйҙер йылылыҡ килгән төҫлө. Бындай фотолағы картина, төҫлөгә ҡарағанда, йомшаҡраҡ йәки, киреһенсә, көсөргәнешлерәк булып күренергә мөмкин. Ә портреттарҙы аҡ-ҡара контекстა эшләү, минеңсә, айырыуса отошло, сөнки улар ыҡсымыраҡ була.

Һәр фотографтың да төҫкә ҡарата үҙенә генә хас ҡарашы бар. Кемдер ҡояшта янған кешене төшөрөргә ярата, икенсеһе аҡ йөҙөлөләрҙе үҙ итә, һәм башҡалар. Ә аҡ-ҡара төҫтәге фотоһүрәттәрҙә төҫкә ҡарата булған барлыҡ мауығыу ситкә китә һәм бар иғтибар тик кешенең йөҙөнә, айырыуса күҙҙәргә, йүнәлә. Ә күҙҙәр, белеүебеҙсә, кешенең күңелен сағылдыра, тимәк, был осраҡта фоторәссам кешенең тышҡы йөҙөн генә түгел, ә эске донъяһын да сағылдырыу мөмкинлеге ала. Төҫтәр менән эшләү, ғөмүмән, ҙур оҫталыҡ талап итә, сөнки төҫ - ул фотоһүрәттең акценты. Мәҫәлән, ҡыҙыл төҫтө бары тик агрессив итеп кенә ҡабул итергә ярамай, сөнки ул төрлө контекстан, яҡтыртыуҙан, урындан һәм композициянан сығып ҡарағанда төрлөсә күренергә мөмкин. Шул уҡ хәл башҡа төҫтәргә лә хас. Фотоның сифатлы булыуына шулай уҡ фотоға төшөүсе үҙе лә ҙур йоғонто яһай. Фото төшөрөү - ул диалог, һәм әңгәмә ҡороусының кемеһелер өнһөҙ икән, диалог килеп сыҡмаясаҡ.

Фотограф һөнәре ижади эшмәкәрлек һәм мауыҡтырғыс шөғөл. Фотоны сифатлы, мәғәнәле һәм кешегә оҡшарлыҡ итеп эшләү өсөн фотографтың фото төшөрөү оҫталығына ғына эйә булыуы аҙ. Ул, тәү сиратта, бай ижади хыялға, фантазияға һәм яҡшы зауыҡҡа эйә булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хоҙай тәбиғәтте лә, кешеләрҙе лә берҙәй матур итеп яратҡан. Берәүҙәр быны бары тик маңлай күҙе менән күрһә, икенселәр иһә күңел күҙе менән баға. Фотографтарҙы икенселәр рәтенә индереү дөрөҫ булыр, сөнки улар тирә-яҡ менән үҙҙәре генә белгән телдә аңлаша һәм аралаша. Һәр күренештән, кешенән, тәбиғәттән үҙенсәлекле сифатты айырып ҡарай белгән һәм уны башҡаларға аңлайышлы телдә асып һалған фотографтар һәр ваҡыт үҙ эшенән ҡәнәғәтлек ала. Зәйтүнә Әнүәр ҡыҙы нәҡ ошондай бәхетле талант эйәләренең береһе лә инде.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ӘЙТӘГҮР!

# ОЛОЛАР ӨЛГӨ КҮРҺӘТӘ...

## йәштәр шуны үҙләштерә

**? Бөгөнгө көн йәштәрен яуапһыҙлыҡта һәм битарафлыҡта ғәйепләйҙәр. Һеҙ быны менән килешәһегеҙме?**



**Нәйлә ӘСӘҘУЛЛИНА, хаҡлы ялда, интернат-мәктәптә тәрбиәсе булып эшләгән:** Эшем буйынса төрлө быуын йәштәре менән аралашырға тура килде. Улар бер-береһенән холоҡ-фиғеле, донъяға ҡарашы, хатта һөйләшеүе менән айырыла, ләкин барыһының да күңеле бер үк төрлө. Мин уларҙы өлгә ҡанаты нығынып бөтмәгән, ләкин бар донъяны иңләп осорға теләгән ҡошсоҡҡа тиңләйем. Йәштәр тирә-яҡҡа, үҙҙәрен уратып алған йәмғиәткә ҡарап үҫә, тәжрибә йыя, формалаша, күңелен байыта, белем эстәй, төрлө сифаттарға эйә була бара. Йәштәрҙе мин оло быуындың, йәмғиәттең сағылышы, тип әйтер инем. Шуға күрә ололарға "Йәштәр былай", "Йәштәр тегеләй", тип ғәйеп ташларҙан алда, "Ә беҙ үҙебеҙ ниндәй һуң?" тигән һорауға яуап бирергә саҡырам. Яуапһыҙлыҡ һәм битарафлыҡҡа килгәндә иһә, был сифаттар егерме йыл элекке йәштәрҙә лә бар ине, хәҙерге йәш быуында ла хас, тик барыһын да дөйөмләштереп ҡарарға ярамай. Йәштәр араһында уңған, аҡыллы, эшһөйәр һәм башҡа һәйбәт сифаттарға эйә булғандар ҙа, үҙҙәрен кире яҡтан таныҡтандары ла етерлек. Һуңғылары, минеңсә, бары тик өлгәгә тормошта үҙ урынын тапмай, елкенгән күңелен, башында ҡайнаған уйҙарын бер епкә теҙә алмайынса үрле-ҡырлы бәргеләнгән йәштәр. Ваҡыт үтеү менән уларҙың да матур, өлгөлө тормош ҡороп, барыһын да һоҡландырып ғүмер итәсәгенә ышанам.

**Рөстәм АБДРАЗАҠОВ, Төрөк һауа юлдары хеҙмәткәре:** 5-6 йыл элек ауылда шундай хәлде күҙәттем. Әсәйемдең бер ҡасан да һыу күрмәгән ике айлыҡ өйрәк бәпкәләрен йылға буйына алып барғайным, улар һыуҙан ҡурҡып ҡаса башланы. Быны һинә - мә! Өйрәк һыуҙан ҡурҡһын әле, ғүмерҙә булмаған хәл бит был. Ни өсөн шулай булды һуң? Сөнки яҡты донъяға килгәндән алып үҙҙәренең тәбиғи мөхиттәрен күрмәгән булған улар. Бөгөнгө йәштәрҙең дә күбеһе ошо өйрәк балалары төҫлө. Аң инә башлағандан алып, улар кешелекһеҙ, миһырбанһыҙ, бысраҡ, алдаҡ, ике йөҙлө, яуапһыҙлыҡ һәм битарафлыҡ донъяһында йәшәй һәм үҫә. Бөгөнгөһө ҡараңғылыҡҡа сорналған йәш кешенең иртәгәһе көнгә бөтөнләй өмөтө лә булмай, юғары сифаттар һәм хистәр, тойғолар хаҡында уйлап ултырырға теләге лә юҡ. Ул бөгөнгө көнгә яраҡлаша, тереклек итә, үҙен уратып алғандар ише ҡылана. Шулай булғас, йәштәрҙән нимә талап итергә, ниндәй яуаплылыҡ һәм ғәмлелек көтөргә мөмкин? Минең уйымса, әгәр ҙә Павел Корчагин, Зоя Космодемьянская кеүек геройҙар хәҙерге ваҡытта йәшәһә, барыбыҙҙы ла һоҡландырған батырлыҡ ҡылынмаҫ ине.

**Артур КӘБИРОВ, полиция хеҙмәткәре:** Бөгөнгө йәштәрҙә мин, яуапһыҙлыҡ һәм битарафлыҡтан бигерәк, эгоизм көслө, тип әйтер инем. Улар үҙҙәрен шул тиклем ярата, хәйрандар ҡалам ҡайһы саҡта. Шулай ҙа йәштәр араһында, ысынлап та, битарафлыҡ көслө икәнен дә инҡар итеп булмай. Тирә-яҡта, илдә, донъяла булған ваҡиғалар менән ҡыҙыҡһынмаған йәштәребеҙ булыуы хәүефләндерә. Улар йомран кеүек, үҙ ояһында ғына ятырға, һин миңә теймә, мин һиңә борсомайым, тигән принциптан сығып йәшәргә тырыша кеүек. Ә бар нәмәгә битараф кешелә яуаплылыҡ тойғоһо булмай, әлбиттә.

**Гүзәл ӘҘЕЛМУРЗИНА, студент:** Бөгөнгө йәштәр насар ҙа, яҡшы ла түгел, улар икенсе. Ғөмүмән, мин төрлө замандағы йәштәрҙе бер-береһе менән сағыштырыу яғында түгелмен. Мәҫәлән, бөгөнгө машина менән теге быуаттың 70-се йылдарындағы автомобилде сағыштырыу урынһыҙ булған кеүек, йәштәр араһында ла ниндәйҙер параллель үткәреп булмай. Һорауҙа яңғыраған һыҙҙәр теге быуынға ла, хәҙерге йәштәргә лә, киләсәк быуындарға ла хас сифаттар, шуға күрә нәҡ бөгөнгө көн йәштәрен генә нимәләлер ғәйепләү дөрөҫ булмаҫ ине.

**Әлфиә ҺАТЛЫҠОВА, Өфөләге 9-сы мәктәптең туған телдәр буйынса директор урынбаҫары:** Ололарҙың "Беҙ йәш саҡта тормош башҡа булды, йәштәр ҙә аҡыллы, тәртипле ине", тигән һүҙҙәрен йыш ишетергә тура килә. Әлбиттә, һәр кемгә үҙ быуыны яҡшы таныш һәм күңеленә яҡын. Шулай уҡ бөгөнгө көндә етешһеҙлектәр ҙә күберәк һәм улар сағыуыраҡ кеүек булып күренәләр. Ләкин, заман башҡа - заң башҡа. Хәҙер беҙҙең алға модернизация, йәғни, яңыса тормош ҡороу бурысы ҡуйылған. Һәм күптәр был бурысты атҡарып сығыуҙы йәштәр ҡулына тапшырырға тырыша. Ләкин йәштәрҙең дә төрлөһө бар. Берәүҙәр был йөктө үҙ иңенә алыуҙан ҡурҡмаһа, янһакөйһә, икенселәр был хаҡта уйлап та бирмәй. Тәүгеләре уҡырға, эшләргә, иленә кәрәкле кеше булырға ынтыла, эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ, тип тормай, ҡырҡҡа ярылып булһа ла, башҡаларға тиң булып йәшәргә тырыша. Ә бына үҙ тиҫтерҙәрең араһында моңһоҙ һәм битарафтарҙы осратыу, ысын күңелдән әсенерлек хәлдәр тураһында һөйләгәндә нурһыҙ күҙҙәрҙе күреү бәкәлгә һуға, аяҡтарҙы тышаулай. Был ваҡытта ирекһеҙҙән Салауат, Аҡмулла, Бабичтар кем өсөн көрәште лә, кем өсөн ғүмерен бирҙе икән, тип уйлайһың. Ил, халыҡ яҙмышы хәл ителгәндә, көндән-көн милләт мәсьәләһе киҫкенләшкәндә, минән киткәнсе - эйәһенә еткәнсе, тип ултырыусыларҙың барлығы күңелгә шом һала. Нәҡ ошондай моңһоҙҙар арҡаһында бөтә йәштәрҙе яуапһыҙлыҡта һәм битарафлыҡта ғәйепләйҙәр ҙә инде. Ләкин барыһын да бер ҡалыпҡа һалып үлсәргә ярамай. Шул уҡ ваҡытта, яуаплылыҡты беҙгә, тик йәштәргә генә тапшырырға ынтылған оло быуын вәкилдәре лә ил яҙмышынан ситтә ҡалырға тейеш түгел. Йәштәр улар ауыҙынан сыҡҡан киҫкен һүҙгә, төплө кәңәшкә мохтаж. Өлегә оло быуын барыбер ҙә бынамын тигән шәхестәрҙе күргән, улар өлгөһөнә ынтылып йәшәгән. Ә хәҙерге йәштәр оло шәхестәр, батырҙар тураһында китаптарҙан ғына уҡып белә, тиер инең, хәҙер китап уҡыу ҙа онотола бара. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йәштәребеҙҙең быуындар бәйләнешен үҙе белгәнсә ялғарға тырышыуы һоҡландыра. Әрләмәйек уларҙы, ярҙам итәйек.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

***✓ Анау тиклем халыҡты нисек яндырып бөтмәк кәрәк? Ни өсөн? Үҙенең тыуған ерен йәндәй күреп яратҡандары, ҡалҡандай ҡалҡып һаҡланғандары өсөнмө? Бер үк Аллаға үҙҙәренсә иман килтергәндәре өсөнмө?***





# Киҫәкбикә

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА**

**(Хикәйә)**

Бығау һалынған Киҫәкбикә-Катеринаны Заводтарҙың баш идаралығы канцелярияһына алып ингәс, һаҡсылар был ҡатындың сикһеҙ тыныс йөҙөнә ҡарап аптырап ҡуйҙы. Ҡулын шаҡарып тотоп бығаулаған саҡта ла, башҡа төрлө тән йәрәхәттәренә дусар иткәндә лә бер ни өндәшмәне лә, ыңғырашманы ла. Теш ҡыҫып, урт сәйнәп, ауыртыуҙарға түҙергә тырышыу түгел, ә сәйер битарафлыҡ ине был. Аҡылдан яҙған йәки аңын юғалтҡандар ғына шулай ауыртыуҙы тоймай. Язалаусылар быны яҡшы аңлай. Шуға ла Киҫәкбикәнән һорау алып торманылар, ҡабат төрмәгә алып киттеләр. Артабан Башҡорт эше буйынса комиссия башлығы генерал Соймоновтан фарман көттөләр. Заводтарҙың баш идаралығы канцелярияһының беренсе ағзаһы майор Лонтий Угримов Байрасоваға ниндәй яза биреү тураһында һорап яҙған хатында тотҡон ҡатындың аҡылдан яҙыу ихтималлығын телгә алып торманы. Фәҡәт: "Суҡындырылғандан һуң Катерина тип исем бирелгән башҡорт ҡатынын өс тапҡыр Башҡортостанға ҡасҡаны һәм, Христиан законын боҙоп, басурманлыҡҡа ҡайтҡаны өсөн ниндәй язаға тарттырырға?" - тигән һорау ғына ҡуйҙы.

Императрица Анна Иоановна 1734 йылдың май айында Сенаттың обер-секретары Кирилловтың башҡорттар һанын яртылаш кәметеү буйынса тәҡдим иткән сараларын һәм шулай уҡ көсләп суҡындырыу тураһындағы планын раҫлап ҡул ҡуйғас, көсләп суҡындырыу башлана һәм суҡындырылған башҡорттар, Христиан законынан аҙ ғына булһа ла тайпылһа, ҡаты язаға тарттырыла ине. Шуға ла Угримов, Киҫәкбикә-Катерина тураһында яҙғанда, уның үҙ диненсә доға ҡылып йөрөүенә айырыуса баҫым яһаны. Генерал Соймонов та фарманға ҡул ҡуйыуҙы оҙаҡлатманы... 1739 йылдың 12 февралендә яҙылған хатҡа 14 майҙа ҡул да ҡуйылды. Ә яуап көткән арала төрмә һаҡсылары ла, канцелярия хеҙмәткәрҙәре лә Байрасованың сәләмәтлек торошон асыҡламаҡсы булдылар. 60 йәшлек Киҫәкбикә Байрасованың аҡылдан яҙғанмы-юҡмы икәнлеген тикшереү өсөн, тәржемәсе Иван Дураков менән әңгәмә ойошторҙолар

- Тотҡонлоҡтан ҡасып, ҡабат мосолманса доға ҡылғаны өсөн Туйгилдене яндырҙылар... башҡаларға фәһем булһын тип, - тип "сер уртаҡлашты" Иван.

Суҡындырылған Иван Дураковтың ҡурҡа-ҡурҡа ғына әйткән һүҙҙәренән һуң Киҫәкбикә бер аҙ уйланып ултырҙы ла, арты менән борола биреп, ауыҙ эсенән генә ниндәйҙер аяттар уҡып алды. "Был тиклем тәкәбберлек аҡылдан яҙған кешелә генә булыр", - тигән һығымта яһаны Иван һәм, ҡағыҙына ниҙер яҙып ҡуйғас, һүҙен дауам итте:

- 20 апрелдә бөтөн ҡолдарҙы, тотҡондарҙы майҙанға йыйҙылар ҙа, Туйгилдене барыһы алдында яндырҙылар...

Киҫәкбикә тағы битараф ҡалды. Хатта йөҙөндә генә түгел, бөтөн булмышында аңлайышһыҙ күтәренкелек тойола ине уның. Тағы ҡасыуҙы уйлай, тиһәң, был юлы инде уға бығауҙың да хәтәрен кейҙерҙеләр: муйын менән аяҡтарҙы ҡуша тоташтырғанын. Хатта турайып баҫырлыҡ та форсаты юҡ.

...Киҫәкбикә Байрасованың ире 1735 йылда Ҡараһаҡал ихтилалында әүҙем ҡатнаша. Шуға ла тотош ғаиләһен ҡоллоҡҡа һаталар. 57 йәшен тултырған Киҫәкбикәне лә, Екатеринбургҡа алып килеп, латин мәктәбе уҡытыусыһы Кондратович Кириак Андреевичҡа хеҙмәтсе итеп бирәләр. Бер ай самаһы уларҙа торғас, суҡындырып, Катерина тигән исем ҡушалар. Ошонан һуң ул ҡасыу тураһында ныҡлап уйлай башлай. Тик тыуған яғының ҡайҙа, ҡайһы яҡта икәнлеген белмәгәнлектән, ваҡытлыса түҙә. Ә бер көн, ҡаланан ситкә сығып, тирә-яҡты байҡап, ағас ботаҡтары, ҡырмыҫҡа иләүе буйынса йүнәлеш билдәләп йөрөгән сағында, тотоп алалар ҙа, ныҡ ҡына ҡамсылайҙар, "аҡылға ултыртҡас", ҡалала протопоп ҡатынына хеҙмәтсе итеп бирәләр. Киҫәкбикә өнһөҙ-тынһыҙ ғына хеҙмәт итә башлай. Протопоптың кабинетын йыйыштырған саҡта, ары-бире һүҙ ҡушҡылап, Екатеринбург ҡалаһының ҡайһы тирәлә урынлашҡанлығын һораша. Һүҙ ыңғайында үҙенең Ҡатай волосынан икәнлеген дә әйтеп ҡуя. Ә протопоп был волосты белеүен, хатта Екатеринбургтан ҡайһы яҡта урынлашҡанын да ҡулы менән ишаралап күрһәтә.

Киҫәкбикә оҙаҡҡа һуҙмай, тағы тәүәкәлләй, тағы ҡаса. Тик Исәт йылғаһы аша сығырға кисеү эҙләгән сағында тотола. Был юлы инде сыбыртҡы менән һуҡтыралар. Ул бер аҙға баҫыла, тән яраларын дауалай, сохари киптерә, алмаш кейемен, аҙ-маҙ ризығын һалған артмағын, йөҙгән саҡта һыуланмаһын өсөн башына бәйләп ҡуймалы итеп әтмәлләй. Иң мөһиме - Исәт йылғаһының аҙ булһа ла һайығыуын көтә. Япраҡтар һарғая башлағас, иҫке ай тамамланып, яңыһы менән алмашынған мәлдә, аҡ менән ҡара төҫ айырылмаҫлыҡ иң ҡараңғы төндә, Аллаға тапшырып, сығып ҡаса. Ҡаса ла өс айҙан һуң үҙ ризалығы менән ҡабат килә... Өлкән йәштәге был ҡатындың ҡасыуы ла, үҙе теләп ҡабат килеүе лә, язалауҙарға түҙеүе лә төрмә хеҙмәткәрҙәрен аптырата.

- Туйгилдене яндырған саҡта, майҙандағылар "аһ" итеп ҡалды. Мин ҡарамаҫҡа тырыштым, ә барыбер тойҙом. Тереләй яндырыу... Кешене тереләй яндырыу... Йөрәгем күкрәгемдән сығып китер һымаҡ типте.

- Ул саҡта мин дә булдым. Мин бит ике тапҡырында ла йәй ҡастым. Ә Туйгилде мәрхүмде яҙ яндырҙылар. Мин күрҙем ул йыртҡыслыҡты...

- Һин күрҙеңме ни? - тип, ғәжәп бер яңылыҡ асҡандай, шул уҡ ваҡытта был һүҙҙәрҙе кем өсөндөр әйткәндәй, ҡысҡырып ебәрҙе лә Иван, тағы шыбырлауға күсеп: - Уны яндырғандарын күрһәң дә иман тоторға баҙнатың етәме? - тип һораны аптырап. - Туйгилдене ҡасҡаны өсөн түгел, ә суҡындырылғандан һуң ҡабат мосолманса доға ҡылғаны өсөн яндырҙылар бит. Ҡатындарҙы ла яндырасаҡтар... Шуны беләһеңме?

Киҫәкбикә Һыҙғы волосынан ҡайтып киткән Төйөнбикә Йомановаға ла, ире Ҡаратбайҙың да иҫән икәнлеген ишетеп ҡалғас, Күҙәмеш волосына ҡасҡан йәш кенә ҡатынды ла, ҡасыу тураһында хыялланып йөрөгән иҫәпһеҙ күп башҡа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын да күҙ алдына килтереп, көрһөнөп ҡуйҙы ла:

- Беләм, - тине.

Иван Дураков быңдай һөйләшеүҙән һуң Киҫәкбикәнең аҡылдан яҙған булыуын ғына теләне.

Өсөнсө тапҡыр өс йылдан һуң Исәт йылғаһын йөҙөп сығып ҡасты Киҫәкбикә. Көҙ мәлендә йылға һайыраҡ булһа ла һыу бик һалҡын ине. Киҫәкбикә, башына бәйләп сылатмай алып сыҡҡан өҫ кейемен кейеп, бер аҙ ҡапҡылап алғас, һәрмәп йөрөп кенә ҡойолған япраҡтарҙың ҡоролаauthor йыйҙы ла шуға күмелеп серем итеп алды. Төнөн йондоҙҙарға ҡарап йүнәлеш билдәләне, көндөҙөн тағы япраҡтарға күмелеп ятты. Юл алыҫлығын да, аяҡтарының сикһеҙ һыҙлауын да уйламаны ул. Уны улы, ауылы, ауылдаштары, туғандары ғына борсоно.

"Байрасовтарҙың береһен дә ҡалдырмаясаҡбыҙ!" тип, берәм-берәм эҙәрлекләй, тапҡандарын үлтереп, йә ҡоллоҡҡа һатып ҡыра башлағас, кинйә улын - Биксәтәйен урманға ҡасырғайны. Карателдәр уны тапмағас, Киҫәкбикәнең үҙен тотоп алып киттеләр. Улының яҙмышы тынғы бирмәне өс йыл буйы. Уның хәлен белергә, исмаһам, балаларының береһенең хәлен белергә ине, тип йөрәкһене ул. Әле бына тыуған яҡтарына яҡынлаша... Тик көндөҙҙәрен урманда йоҡлап, төнөн берәй башҡорт ауылында туҡтайым, тип ымһынып барһа, уныһы яндырылған булып сыға. Эй, башҡорт ауылдары, туғандарым минең, бауырҙаштарым, ҡайҙа булып бөттөгөҙ тырымтырағай? Бөтөнөгөҙҙө лә яндырып, көл-күмергә әйләндермәгәндәрҙер ҙә һуң? Анау тиклем халыҡты нисек яндырып бөтмәк кәрәк? Ни өсөн? Үҙенең тыуған ерен йәндәй күреп яратҡандары, ҡалҡандай ҡалҡып һаҡланғандары өсөнмө? Бер үк Аллаға үҙҙәренсә иман килтергәндәре өсөнмө? Шулар язаларға дусар итерлек ғәйепме? Ауылы-ауылы менән, йәшен-ҡартын аямай, гонаһһыҙ сабыйҙарын йәлләмәй ҡырып һалсы... Мейес мөрйәләре генә һерәйешеп ултырып ҡалған ауыл урындарын ҡарап, Киҫәкбикәнең йөрәккенәһе ҡыҫып-ҡыҫып сәнсте. "Уныҡылар ҡайҙа икән? Кинйәкәйе ни хәлдә? Утта үртәр өсөн ҡорҙоҡмо ни беҙ ауылдарҙы? Утын ағасы һымаҡ яндырыр өсөн үҫтерҙекме ҡарағайҙай улдарҙы? Әсәй, өләсәй булған Киҫәкбикәнең йөрәк башҡайына ҡан һауҙырырлыҡ йән әрнеү-рәнйеүҙәре тән һыҙланыуҙарын уйларға ирек бирмәне.

Яратҡан кешеһенә сығып, килен булып ҡайныҡәйнә бағып, аҙаҡ үҙе килендәр төшөрөп, ҡыҙ биреп, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар менән саҡырышып-һыйлашып бынамын итеп донъя көтәләр ине. Ҡоҙаларының ауылы ла юҡ хәҙер урынында. Тирә-яҡта бесәнлек тә, иген баҫыуҙары ҡара көйөп ята. Әллә яңылыш юлдан киттемме, тиһә, урман-туғайҙары, тау-убалары шул уҡ. Тик ауылдар ғына юҡ. Бына ул ҡайтып етте, анау ҡалҡыулыҡты ғына артылһа - ауылы... Ана - балаларының береһен күтәреп, икенсеһен итәгенән тоттороп, башҡаларын эйәртеп йөрөгән болондары. Күҙ алмаларын талдырғансы ҡарап торҙо. Кемдәр генә иҫән икән дә, кем ҡурҡмай һыйындырыр икән? Кемдәргә күҙ терәп инер ҙә, кемгә бауыр баҫыр? Тик ауылы юҡ ине. Урыны буп-буш. Күкрәгенән ялҡын бәреп сыҡҡандай булды, йөрәге шартлар сиккә етте, бер аҙ урынынан ҡуҙғала алмай, сайҡалып торҙо. Эргәһендәге ағасҡа тотондо. Бер йығылһа, тора алмаҫ һымаҡ тойҙо үҙен. Был тиклемен башына һыйҙыра алманы. Башҡа ауылдарҙың яндырылғанын күрһә лә, "кешенеке итәктә, үҙеңдеке йөрәктә" тигәндәй булғайны. Был хәл быуынына төштө. Һөйәктәренең тирелеп төшөрҙәй һыҙлауы әле генә тойолдо. Ҡайҙа барырға, артабан ни эшләргә белмәй, бер аҙға албырғап ҡалды. "Төндө үткәрәйем дә, таң атҡас байҡармын тирә-йүнде", тип уйланы. Тыуған яғының әскелт төтөн һеңгән һауаһын күкрәктәрен тултырып һуланы ла ҡыштырҙап торған япраҡ өйөмөнә ауҙы.

Заруратtан ашҡынып-йөрәкһеп ҡайтып ҡына күрерлек булмаған икән шул. Мәңгелеккә юҡ ителгән барыһы ла. Көндөҙ йәшеренеп ятты. Был юлы ул тыуған ере урманында, тыуған ере япраҡтары аҫтында йәшенде. Уйламаған ғына уйы, күҙ алдына килтермәгән үткән ғүмер көндәре ҡалмағандыр. Яндырылған ауылы янында ғына ултырып, йылдай оҙон тойолған көҙгө көндө үткәреп ебәрҙе. Ҡалҡыулыҡ һарҡыуында йылға буйындараҡ һыйыр баҡырыуын, кәзәләр мезелдәүен ишетмәһә, хыялыйланыу сигенә етер ине. Быҫҡып ҡына ятҡан усаҡта ҡалған бөләңгерт ҡуҙ һымаҡ, өмөт осҡоно йөрәгенә йылы өрҙө. Шунда йәшәгән кешеләрҙән ни ҙә булһа белеренә өмөт бәйләп төн еткерҙе. Эңер төшкәс, ептәй нәҙек кенә булып төтөн күренгән яҡҡа ыңғайланы. Улының иҫәнлеген белеп, был яҡтарҙан алыҫҡараҡ китеп өлгөрһә, тағы тотһалар ҙа үкенмәҫ ине. Тоҫмаллап килеп еткән ере ауылға оҡшағайны. Өшәләктәй генә бер-нисә өй ултыра, ай яҡтыһында аран түбәләрен дә шәйләп була. Киҫәкбикәнең күңеленә йылылыҡ йүгерҙе, ниндәйҙер ышаныс йөрәгенә майҙай ағылды.

**(Дауамы бар).**

*ИЖАДХАНА*

**Сәнғәт донъяһын театрһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Беҙҙе зауыҡҡа, матурлыҡҡа, гүзәллеккә әйҙәүсе театр ниндәй замандарҙа ла үҙ юғарылығын һаҡлап ҡалыусы, тамашасы күңеленә изгелек орлоҡтары сәсеүсе сәнғәт төрө ул. Был хәҡиҡәттә, тәү сиратта, театр сәхнәһенә күтәрелеүсе һәр актерҙың яҡшы аңлауы мөһим. Уның бар күңелен биреп, йөрәген һалып ижад итеүе, һәр роленә етди ҡарауы ғына театр сәнғәтенең үлемһеҙлеген тәьмин итергә мөмкин. Нәҡ ошондай актер ғына тамашасы йөрәгенә юл табып, театр мәртәбәһен күтәрәсәк. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының йәш актеры Юнир ҠОЛАНБАЕВ быны яҡшы аңлай һәм үҙ ижадын үҫтереү, байытыу өсөн бар көсөн һала.**

# ТЕАТРҒА ТОРОШЛО БУЛЫУ -

## йәш ижадсының ынтылышы ошо

### Күңелем сәхнәлә булды

Оло тормош юлына һуҡмағым республикабыҙҙың иң матур төбәктәренең береһе - хозур тәбиғәтле, изге күңелле кешеләр йәшәгән Баймаҡ ҡалаһынан башланды. Мине уратып алған матурлыҡ күңелемә тәьҫир итмәй ҡалмағандыр, күрәһең, сәнғәткә ынтылыуым бәләкәйҙән килә. Бәләкәйерәк саҡта туғандарыма концерттар ҡуйһам, үҫә төшкәс, район кимәлендә уҙғарылған сараларҙа ҡатнаштым. Тәүге тапҡыр үҙешмәкәр йырсылар конкурсында ҡатнашып, "Сафия" йырын башҡарған өсөн бүләккә бирелгән ҙур ҡыҙыл төҫтәге машинаны тотоп, ҡыуана-шатлана өйгә ҡайтып барыуым әле генә булған кеүек.

Күңелем һәр ваҡыт йырға, моңға, ғөмүмән, сәнғәткә тартылды. Мәктәп йылдарында музыка мәктәбенең хор һәм баян кластарында шөғөлләндем, ә 9 сыныфтан һуң Сибай музыка училищеһының вокал бүлегенә уҡырға индем. Йырсы булам, тигән теләгемә тормош бер аҙ үҙенең төҙәтмәләрен индерҙе һәм сәхнәгә минә актер булараҡ күтәрелергә тура килде. Училищеның 2-се курсында уҡып йөрөгәндә вокал буйынса уҡытыусым Камил Абдрахман улы Вәлиев Мәскәүҙәге Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһына республиканан бер төркөм егет һәм ҡыҙҙарҙы йыйыуҙары хаҡында белдерҙе һәм минә лә бәхетемде һынап ҡарарға тәҡдим итте. Бер ҡасан да актер булырға хыялланмаһам да, имтихандар тапшырыу өсөн Өфөгә юлландым. Бер-нисә һайлау туры үтеп, ошо абруйлы институт студенты булып киттем.

Илебеҙ баш ҡалаһында уҙған биш йыл ғүмерем иң яҡты хистәр уятыр мәл булып, күңелемдә мәңгегә уйылып ҡалды. Ҙур ҡалаға барып, ундағы мөхиткә өйрәнеп-күнегеп китеү, әлбиттә, еңелдән булманы. Ләкин янымда тыуған яғымдың бер өлөшө булған, Башҡортостанымда йөрөгән кеүек хис итергә мөмкинлек биргән курсташтарым, шулай уҡ беҙҙе ҡурсалап, көрәк урында әрләп тә торған кураторыбыҙ Рәсимә Миннибулат ҡыҙы Ураҡсина булыуы хәлемде еңеләйтә ине. Шулай ҙа мин һәр ваҡыт тыуған яғымды һағындым, гел генә ҡайтҡым килә ине. Ғөмүмән, мин ҙур, шаулы



мегаполистарҙы үҙ итеп бөтмәйем, күңелем һалмаҡ тормошло, ҡабалан-ашығыуһыҙ ергә ынтыла. Мәскәүҙәге бер туҡтауһыҙ хәрәкәткә, ығы-зығыға биш йыл эсендә бер нисек тә өйрәнеп тә, күнегеп тә булманы. Шуға күрә студент йылдары ни тиклем күңелле булыуға ҡарамаҫтан, ул осорҙан иң иҫтә ҡалғаны- күңелдәге һағыныу хисе, тип әйтер инем.

### Театрыбыҙ хаҡында

Мәскәүҙә уҡығанда ҡайһы театрға эшкә барасағыбыҙҙы белмәй инек әле. Өфөгә ҡайтҡас, һәр беребеҙ менән айырым әңгәмә уҙғарылды һәм төрлөбеҙ төрлө театрға эшкә тәғәйенләнде. Минә һәм тағы ла бер-нисә курсташыма республикабыҙҙың иң билдәле, абруйлы сәхнә йондоҙҙары ижад иткән театрға эшкә килеү бәхете тейҙе. Тәүге тапҡыр театрға килгән көндә барлыҡ театр артистарының урамға сығып, беҙҙе ҡаршы алыуҙы күңелле бер сараға әйләндереүен оло йылылыҡ менән иҫләйем.

Уҡыу йортонда алған белем менән генә ысын актер булыуы мөмкин түгел, янында теоретик белемде ныҡытыусы, актер һөнәренең эстәлеген, булмышын, матурлығын һәм ҡатмарлылығын ғәмәли йәһәттән аңлатыусы тәжрибәле ағай һәм апайҙарҙың булыуы мөһим. Театрыбыҙ артистарының барыһы ла беҙгә, йәштәргә, ярҙам ҡулы һуҙа, һәр башланғысыбыҙҙы ҡеүәтләп, өйрәтеп, матур кәңәштәрен бирә. Был йәһәттән мин үҙемде бик бәхетле һанайым һәм өлкән коллегаларыма рәхмәтемде белдерәм.

Был театрҙа эшләүем минә оло яуаплылыҡ өҫтәй. Әгәр ҙә мине ошо театр сәхнәһенә торошло итеп тапҡандар икән, тимәк, ышанысты аҡлау өсөн оло тырышлыҡ һалырға, үҙенде актер булараҡ үҫтерергә, бер урында тапанмайынса, әленән-әле ижади юғарылыҡҡа ынтылырға тейешмен, тип уйлайым. Мин һәр ваҡыт өлкән коллегаларымдың уйынын, теге йәки был роль өҫтөндә нисек эшләүен, үҙҙәрен сәхнәлә нисек тотоуын иғтибар менән күҙәтәм. Артист уйнай-уйнай, башҡаларҙы ҡарай-ҡарай үҫә, камиллаша, ижади һөнәрен бейеклеккә күтәрә. Һәр ролем өҫтөндә, ҙур булһынмы ул, бәләкәйме, оло яуаплылыҡ менән, көсөргәнешле эшләйем, геройымдың холҡон өйрәнәм, уй-кисерештәрен аңларға тырышам, ғөмүмән, үҙем шул геройға "әйләнәм". Төп ролде башҡарыусы ла, күмәк сәхнәлә ҡатнашыусы ла, сәхнәгә бер генә тапҡыр сығып күренеүсе лә - барыһы ла үҙ роле менән яна, йәшәй, шул турала уйлай. Роль өҫтөндә эшләгәндә актер геройына йә һоҡланып, йә нәфрәтләнеп, йә йәлләп, йәки уны өлгө итеп ҡарай. Әгәр ҙә геройың ауырлыҡтарға ҡарамай маҡсатына табан барыусы, рухи яҡтан көслө кеше икән, һин дә унан өлгө алаһың, уға оҡшарға тырышаһың. Ә геройың, киреһенсә, мәүеш, ялҡау, бер нәмәгә эшкинмәгән, донъяла үҙ урынын таба алмаған кеше сүрәтендә булһа, тормошонда уныҡына оҡшатмаҫ өсөн барыһын да эшләйһең. Һәр роль актер тормошонда, уның холоҡ-фиғелендә ниндәйҙер үҙгәрештәр булдыра. Спектакль барышында тойған һәр хис актерҙа ниндәйҙер эҙ ҡалдыра. Был - тәбиғи. Әгәр ҙә актер роль өҫтөндә бер ниндәй тойғоһоҙ, уйланыуҙарһыҙ һәм борсолоуҙарһыҙ эшләй икән, уның уйнауы тамашасы йөрәгенә барып етмәйәсәк ул. Сөнки йөрәктән сыҡҡан ғына йөрәккә етә. Шулай уҡ ролдең генә түгел, сәхнәгә сығарылған тотош спектаклдең тәьсирен инҡар итеп булмай. Мәҫәлән, Зәки Вәлиди хаҡындағы спектакль өҫтөндә эшләгәндә барыбыҙ ҙа был образдың мөһабәтлегенә, даһилығына, мәртәбәһенә һоҡланып ҡараныҡ.

### Төп тәнҡитсе - үҙем

Һәр ижад кешеһе хуплау, маҡтауға һәм урынлы ғына әйтелгән тәнҡиткә мохтаж. Мин дә ҡағиҙәнән ситләшмәгәнмен. Ижадымдың, ғөмүмән, тормошомдоң төп тәнҡитсеһе - үҙем. Һәр уйнаған ролемде тәнҡит күҙлеге аша үткәрәм, уйланам, ролемде асып еткерә алманым кеүек тойолһа, уның өҫтөндә тағы ла нығыраҡ эшләйем, икенсе тапҡыр сәхнәгә сыҡҡанда тырышыбыраҡ уйнайым. Мин бер ҡасан да үҙемдең эшемдән тулыһынса ҡәнәғәт булмайым. Һәр ваҡыт нимәнелер эшләп еткермәгән кеүекмен, ролемде тағы ла һәйбәтерәк итеп уйнай алыр инем, тигән тойғолар китмәй күңелдән. Дөйөм спектаклдең уңышын күреү, һис шикһеҙ, күңелгә ҡәнәғәтләнеү тойғоһо бүләк итә, ләкин үҙем башҡарған ролдән тулыһынса ҡәнәғәт булғаным юҡ әлегә. Бәлки, был дөрөҫ тә түгелдер, ләкин үҙемә ҡәтғи тәнҡит күҙлеге аша ҡарауым файҙаға ғына, тип уйлайым. Ә бына маҡтау һүҙҙәрен ишетеү минә әле булһа ауыр. Бында тәбиғәттән бирелгән баҫалҡылыҡ, оялсанлыҡ "гәйепләлер", тимен.

Тырыш булғанда ғына ниндәйҙер бейеклеккә күтәрелергә, үрҙәр яуларға, тормошта үҙеңдән лайыҡлы урыныңды табырға була. Шулай уҡ үҙ эшеңә ҡарата яуаплылыҡ булмаһа, ҡыйынлыҡтарҙы еңеү урынына, уларҙан баш баҫып ҡасыуҙы хуп күрһәң, тирә-яҡтағыларға ихтирамлы була белмәһәң, бер эшең дә алға китмәйәсәк. Был принциптар ҡәҙимге тормошта ла, ижадта ла тәүге урындарҙы алып тора. Алдыңа маҡсат ҡуйып, шуға өлгәшеү өсөн тырышҡанда барыһын да тормошҡа ашҡарып була. Ғөмүмән, барыһы ла был донъяла үҙеңдән тора.

### Актер - йәнһеҙ ҡурсаҡ түгел

Актер - йәнһеҙ, ниндәйҙер ролде уйнарға программаланған ҡурсаҡ түгел һәм ҡайһылыр осраҡта уның ихтыярынан тыш сәхнәлә ниндәйҙер көтөлмәгән ваҡиғалар булырға ла мөмкин. Уның да тормошонда күңелһеҙлектәр була, донъяуи проблемалар баҫа, ул ауырып алырға ла мөмкин, һәм башҡалар. Ләкин үҙен сәхнәгә бағышларға ҡарар иткән кешенең тормош мәшәҡәттәренән арына белеү, донъя ваҡиғаларын ижадына зыян килтермәслек итеп үткәреп ебәреү һәләтенә эйә булыуы мөһим.

Ғөмүмән, мине һәр ваҡыт аңлап торорусы, яратыусы ғаиләмдең янымда булыуы ижадта ла, тормошта ла уңыштарға өлгәшергә ярҙам итә. Илһам сығанағымдың тағы ла берәүһе - ул йыр. Күңел бошонғанда, йөрәк шатлыҡтан дөрләгән мәлдәрҙә ярһыулыҡты, бушлыҡты йыр баҫа. Йыр минә өмөтһеҙлеккә, төшөнкөлөккә баш эймәҫкә көс бирә, күңелемдәге әйтә алмаған һүҙҙәрҙе белдерергә мөмкинлек аса. Йыр - минең яратҡан, күңел биреп башҡарған шөғөлөм. Йырһыҙ бер көнөмдө лә күҙ алдына килтерә алмайым. Йырлап йәшәйем, йырлап ижад итәм. Тағы ла тыуған яғым, Башҡортостаным тәбиғәте лә минең өсөн илһам сығанағы. Дуҫтарым, туғандарым менән урман-ҡырҙарға сығырға яратам, тәбиғәттән көс-ҡеүәт, энергия алып ҡайтам. Буш ваҡыттарымда һалмаҡ ҡына аҡҡан ағын һыуға ҡарап ултырып, балыҡ тоторға яратам. Бындай саҡтарҙа мин уй-фекерҙәремде төйнәйем, күңелгә тынғылыҡ бирмәгән һорауҙарға яуаптар эҙләйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Театр сәнғәте бер урында туктап ҡалмаһын һәм ҡыйыу, ышанысллы аҙымдар менән алға барһын өсөн коллективта билдәле халыҡ артистарының ғына булыуы аҙ. Бының өсөн, бөгөнгө геройыбыҙ кеүек, театр донъяһында тәүге аҙымдарын ышанысллы яһаған, дәртле, үҙ эшенә мөкиббән киткән, театр сәхнәһендә төрлө образдар тыуҙырырға хыялланған һәм ошо хыялын ысынбарлыҡ итеү өсөн бар көсөн һалған йәш актерҙарҙың булыуы ла мотлаҡ.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

---

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

## СИРҘЕҢ - ӘМӘЛЕ...

### бәләнең ғәмәле бар

- Һәр сирҙең әмәле, бәләнең ғәмәле бар.
- Уттан һаҡлан - уның үрсеүе ныҡ.
- Донъя көтһәң, бәлә һалма - ҡамыт кей муйыныңа.
- Ларым буш, тип ҡыҫҡырма, эшлә, берәүгә лә ал бирмә.
- Ҡол булып тыуған - ҡолға, ғорурҙар бөркөткә әйләнер.
- Ялан башта ел уйнар, сәлләлегә нур ҡуныр.
- Ҡәүем көсө - туғанлыҡта.
- Кәңәш биреүсе аҙ булһа ла, һораусыһы күп булһын.
- Тормош үҙгәргән һайын тәғәрмәстәй өйрөлмә, үҙ күсәрең ныҡ булһын.
- Татыулыҡ булмаһа, тышта бүре ҡарашы, өйҙә ыҙғыш та талаш.
- Ашын аша атлаған - үҙ башына шашынған.
- Ашығыуҙан аш бешмәй - һөрөнөп йығылаһың да, маңғайға оро сығараһың.
- Ҡайғыла, шатлыҡта туғандарыңа таян: дуҫтар күктәге болот - йә ямғырға, йә боҙға ҡойондора.
- Аш үткәндә ашап-эс, кеҫәң ҡушһа, донъя гиҙ.
- Киң күңелле илдә йәҙер, аҡылы күп донъя биҙәр.
- Тешһеҙ аҫҡыс йоҙаҡты, йомоҡ-тумһай күңелде асмаҫ.
- Ярлы нисек байыҡһын - ҡышҡылығын йәй кейгәс.
- Ҡарауһыҙға закон юҡ: алдым-йолдом бер йота.
- Бурҙың ҡулы дүрт булыр: икәүһе эшләр, икәүһе урлар, күҙ ҙә эйәрмәй ҡалыр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Көнөнә бер сәғәт йәйәү йөрөү йәки физкультура менән шөғөлләнеү ғүмерҙе 4,5 йылға оҙайта. Аҙнаһына бер тапҡыр 75 минут ҡына булһа ла саф һауала йөрөү 1,8 йыл ғүмер өҫтәй.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘ ТАҢ...

## тәүлектең бәхетле мәле

■ Кешеләр табиптар тураһындағы сериалдарҙы һәм медицинаға бағышланған телешоуҙарҙы ярата, сөнки улар үҙҙәре тураһында күберәк белергә теләй. Һәр хәлдә, бындай тапшырыуҙарҙың популярлығын Короллек медицина йәмғиәтенең психиатрия бүлеге президенты, профессор Грегори Иккос ошолай аңлата. BBC аныҡлауынса, һуңғы йылдарҙа кеше үҙенең тән төҙөлөшө тураһында ысынлап та күберәк белә башланы. Хәҙер нимә ул арҡа мейеһе йәки веноз ҡан әйләнешенең артериаль ҡан әйләнешенән ниməһе менән айырыла икәнен барыһы ла аңлата ала. Әммә медицина бер урында тормай, шуға ла кешелек тә унда ниндәй үҙгәрештәр һәм яңылыҡтар барлығын белгеһе килә һәм ошондай шоуҙар ҡарай башлай. Белгестәр иҫкәртеүенсә, бындай телетапшырыуҙарға ышанырға һәм һуңғы яңылыҡтарҙы уларҙан эҙләргә ярамай, сөнки уларҙың сюжеты медицина белеме бөтөнләй булмаған кешеләр тарафынан уйлап сығарыла.

■ Рәсәйҙә энергетик эсемлектәр әйләнешен тыйыуҙары ихтимал. Был турала Роспотребнадзор етәксеһе, илдең төп санитар табибы Геннадий Онищенко белдерҙе. Йәштәр күпләп ҡулланған энергетик эсемлектәрҙең зыянынан тыш, бер файҙаһы ла юҡ. Етмәһә, энергетиктарҙы йыш ҡына алкоголле эсемлектәр менән бутап ҡулланыу киң таралған. Газлы эсемлек  алкоголдең үҙләштерелеүен тиҙләтеү сәбәпле, был сәләмәтлек өсөн тағы ла хәүефлерәк. "Интерфакс"ҡа биргән интервьюһында төп санитар табип был идеяның "йәштәр субкультураһында барлыҡҡа килгән был яңы күренеште тиҙ арала һәм тулыһынса туҡтатырға" мөмкинлек бирәсәгенә баҫым яһаны.

■ АҠШ ғалимдары белдереүенсә, иртә - тәүлектең иң бәхетле мәле. Ике йыл дауамында психологтар Twitter социаль селтәре ҡулланыусыларын анализлаған. Хәбәрҙәр араһында ғалимдар тойғоларҙы белдереүсе һүҙҙәрҙе эҙләгән. "Барыһы ла яҡшы", "супер", "фантастика" һүҙҙәрен яҡшы кәйефтәге кешеләр әйткән, ә "ҡурҡам", "хәүефләнәм" тигән һүҙҙәр кешенең үҙен насар тойоуын күрһәткән. Статистика күрһәтеүенсә, аҙнаның ниндәй көнө булыуына ҡарамаҫтан, кешеләрҙең кәйефе иртәнсәктән кискә ҡарай ҡырҡа насарайған. Бәхет тойғолары төрлө байрамдарҙа тағы ла көсәйеп китә икән. Әммә кешеләр үҙҙәрен Яңы йыл байрамы мәлендә һәм, ғөмүмән, декабрҙән ғинуарға тиклем бигерәк бәхетле тоя.

■ Швеция ғалимдары раҫлауынса, көнөнә 1 сынаяҡ ҡара сәй эсеү 2-се типтағы шәкәр диабеты хәүефен түбәнәйтә. Британияның медицина журналы яҙыуынса, ғалимдар 50 илдә йәшәүселәр тураһындағы мәғлүмәттәрҙе тикшергән. Был һандарға ҡараһаҡ, ҡара сәйҙе иң күбе Бөйөк Британияла, Ирландияла, Төркиәлә эсәләр. Төньяҡ Корея, Бразилия һәм Ҡытайҙа сәйҙе аҙ эсәләр. Көнөнә бер тапҡыр булһа ла ҡара сәй эсергә ғәҙәтләнеүселәрҙә шәкәр даибеты һирәк осрай. Быны статистика ла раҫлай, әммә ғалимдар был күренештең сәбәбен асыҡлай алмаған.

■ PloS One журналы яҙыуынса, көнөнә бер сәғәт йәйәү йөрөү йәки физкультура менән шөғөлләнеү ғүмерҙе 4,5 йылға оҙайта. Бостондағы Гарвард медицина мәктәбе тикшереүселәре үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, аҙнаһына бер тапҡыр 75 минут ҡына булһа ла саф һауала йөрөү 1,8 йыл ғүмер өҫтәй.

ҺАБАҠТАР

**Барыбер ҙә донъялағы иң ҡыҙыҡлы һөнәрҙер ул журналислыҡ.Тап мәҡәлдәгесә: күрә-күрә күсәм булаһың, һөйләй-һөйләй сәсән булаһың. Бынан ғәйре, кеше яҙмыштарына сырмалаһың, күңел сөмбәйҙәренең иң сөңгөлөнә сумып сығаһың. Күреп күҙ ҡыуанһа, ишетеп йөрәк тетрәнгәне лә, күңел әрнегәне лә аҙ түгел. Бынан һабаҡ та алаһың, аҡыл да туплайһың, ҡәләмең дә ослана, телең дә оҫтара. Әйткәнең күңелсәптәргә тейһә - шәп, яҙатайым китһә лә хәл юҡ - йырҙа йырланғанса, тормош бит ул...**

# АУЫРЫУ АЯҠТАН ЙЫҒА...

## ә өмөт аяҡҡа баҫтыра



Яңыраҡ юлыбыҙ Яңы Усманға төштө. Яҙмыш һынауына бирешмәгән, үҙ өлөшөнә төшкән һынауҙы лайыҡлы күтәрә белгән бер һылыу хаҡында яҙығыҙ әле, тинеләр. Кем-кем, кеше әйткәнде, халыҡ һорағанды яҙмай булдыра алмайбыҙ. Күргәнебеҙ, ишеткәнебеҙ беҙ уйлағандан, күҙаллағандан хәтәр булып сыҡты. Хәйер, һүҙҙе баштан башлайыҡ.

Мәҡәләм геройы Мәзитова Фәнүзә Йәүҙәт ҡыҙы 12 йәшендә саҡта яман сиргә юлыға - шәкәр диабеты уның бер ҡайғыһыҙ бала сағына, иләҫ-миләҫ үҫмер йылдарына күҙ йәшеләй тоҙло тәмен татыта. Ауылының йәшел сиҙәмендә тиңдәштәре менән аунап үҫкән Фәнүзәгә яҙмыш ғали йәнәптәре һынау артынан һынау ебәрә. Маҡсаты - тал сыбыҡтай үҫмерҙе һындырыу, нығып етмәгән быуындарынан быуып шаңҡытыу. Юҡ шул. Тиккә генә Аллаһ бәндәһенә көсө етмәгәнде йөкләтмәй, тимәйҙәр. Балалары - йөрәк пароләренә төшкән әсе өлөштө сабыр күтәрә Мәзитовтар: әсәй кеше,  ҡарсығанан балаһын ҡурсыған инә ҡоштай, сир-зәхмәткә көрәш асһа, балаһы яҙмышы өсөн ысын күңелдән ҡайғыра белгән атай "йәшел йылан" менән араны бөтөнләйгә өҙә. Бәй, шунһыҙ ҙа булмай шул: Фәнүзәләренә тигән һынау кәмеүгә түгел, артыуға китә. Шәкәр диабеты тигән аҫтыртын сир үҙенекен итә: һөнәр алайым тип район үҙәгендәге һөнәрселек училищеһына уҡырға киткән ҡыҙ аяғын һындыра. Үҙ ямауы үҙендә булмай сыға был ҡазаның - ваҡыты-ваҡыты менән температураһы күтәрелеүгә иғтибар биреп еткермәгән ҡыҙ аяҡтарында гангрена башланғанын ахырынаса белмәй йөрөй. Бер мәл апайҙарына барғанда түшәктән тормаҫлыҡ булып ҡолай... Дауаханаға алып барғас, һынған аяҡтың эстән йолоп боҙолоп, сереп йөрөүе асыҡлана. Үҙәк дауаханала Фәнүзәнең аяҡ бармаҡтарын киҫәләр... Ҡыҙ баланың организмы дарыуҙарҙы ҡабул итә алмай... Йоҡоһоҙ төндәр, хәсрәтле көндәр... Балам, тип өҙгөләнгән әсә хәлен, тере килеш бысаҡ аҫтарына ятыуҙы үҙ башынан үткәргәндәр генә беләләр...

2009 йылдың апрелендә Өфөгә дауаханаға ебәрәләр Фәнүзәне. Гангренаны туҡтата алмай, тубыҡтан аҫта аяғын ҡырҡалар...

- Татьяна Петровна исемле табип ҡараны. Үҙе йәш кенә ине. Минең сыҙамлығыма аптыраны. Операция алдынан шешенеп бөткәйнем, ҡалай матур ғынаһың икән, тип һоҡланыуын йәшерә алманы... Бергә ятҡан палаталаштар, мине ҡараған табиптар бүләктәр биреп хушлашты... - тип хәтерләй ауыр мәлдәрен Фәнүзә. - Һуңынан ишетеп ятам: аяҡта гангрена туҡтамаған. Тағы төптәнерәк ҡырҡырға уйлайҙар. Ҡалайтаһың, маңлайыңа яҙғанды күрмәй сараң юҡ - бер аяҡты өс тапҡыр ҡырҡтырырға тура килде... Аҙаҡ протез аяҡта йөрөнөм. Хоҙай биргәнгә етәме һуң - уныһына әле булһа өйрәнеүе ҡыйын...

Бер яҡтан килтереп һуҡһа, икенсе яҡтан бирә бит ул: ҡырҡылып-телгеләнеп, йөрәккенәһе һыҡрап йөрөгән мәлдәрендә тормошона - бал тәме, йәшәйешенә - мәғәнә, киләсәгенә - өмөт, үҙенә - аяҡ, өмөтөнә маяҡ булырлыҡ кешене осрата Тарыуал һылыуы. Үзбәкстандан күсеп килгән башҡорт ҡанлы Рөстәменә - икенсе яртыһына, Хоҙай бүләгенә Байназарға апайҙарына барған саҡта тәл була ул. Яралы яҙмышына бал да май булып яғыла Рөстәм. Ҡыҙҙы беренсе күреүҙә оҡшата, башын юғалтырлыҡ дәрәжәлә ғашиҡ була. "Мин бит инвалид - аяғым протез", тигәнгә Рөстәмдең яуабы бер була: "Булһын, барыбер өйләнәм!" Оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай, әйттерергә килә...

- Туйҙы бер йыл самаһы үткәс яһаныҡ, мине әйттергәндә күҙҙәрем күрә ине әле... Туй мәлендә күҙ сыраҡтарымдан да яҙҙым... Дуҫтар һоҡланырлыҡ, туғандар ҡыуанырлыҡ итеп туй яһаныҡ. Рөстәм менән осраштырғанға Хоҙайыма мең шөкөр - минең тормошом мәғәнәле хәҙер, - ти Фәнүзә.

Беҙ барғанда Рөстәм өйҙә булмай сыҡты - Белорет яғында эшләп йөрөй икән. Беҙ әңгәмәләшкән арала ғына ике тапҡыр шылтыратты һөйгәненә.

- Рөстәмдең әсәһе үҙебеҙҙең Бөрйән ҡыҙы, әсәһе үлеп ҡалғас, дүрт бер туған улан кире Башҡортостанға ҡайталар. Тәүҙә йүнләп башҡортса белмәй ине, хәҙер һыу һымаҡ эсә, минән башҡортса яҙырға өйрәнеп йөрөй, "Таң" гәзитен уҡый. Эштән ҡайтҡан һайын миңә берәй бүләк алып ҡайта, күтәреп алып йөрөй, - тип айырым бер диҡҡәт, һоҡланыу ҡатыш һөйөү менән бәйән итә икәүара мөнәсәбәттәрен Фәнүзә. Йырларға ла ярата икән үҙе, шишмә сылтырауын хәтерләтеп көлөп тә ебәрә...

Күңел күҙең күрмәһә, маңлайҙағыһы - ботаҡ тишеге, тип ҡалай белеп әйткән фәйләсуф халҡым, тип уйланып ултырҙым Фәнүзә менән һөйләшкәндә.

Әңгәмәгә Фәнүзә өсөн йәнен-тәнен бүлеп бирергә әҙер әсәһе, Хәмдиә апай ҙа ҡушылып китә: "Күҙ генә теймәһен инде балаларыма. Кейәү үҙе бәләкәстән етем ҡалғас, беҙгә, атай, әсәй, тип өндәшә, миңә шулай рәхәтерәк, ти. Килһә, ҡыҙымды күтәреп алып йөрөй, шул тиклем кешелекле, Фәнүзәм, бәпәйем, тип кенә тора. Ошо бәхетенән айырмаһын инде Хоҙай баламды. Ауырыуы сәбәпле, ҡатының бала таба алмай, һиңә һауҙар бөткәнме, тип йөрәгән яралаусылар ҙа табылды. "Миңә бала кәрәкмәй, минең бәпәйем - Фәнүзәм бар", ти.

Ашау-эсеү бергә булһа ла, йәштәр бәләкәй өйҙә ҡунып йөрөй. Бер мәл Фәнүзә йомаҡ ҡоя: "Әсәй, кем таңғы биштә һүнеп барған ҡуҙҙы тоҡандырып ут яға?" - ти ( Беҙ ҡайсаҡ шулай икәү йомаҡ ҡойошоп, йырлап та алабыҙ). Мин: "Берәй егәрле, ныҡ уңған кешелер", - тигән булам. "Юҡ, әсәй, Рөстәм", - ти. Баҡһаң, бәләкәй өй таңға табан һыуып киткән икән. Ул өйҙә шырпы-фәлән дә булмай сыҡҡан. Фәнүзә, әсәйемдәрҙе уят, тиһә лә, кейәү бала беҙҙең йоҡоно аяп, кистән яҡҡан мунсанан барып һүнеп барған ҡуҙҙы алып, шуға йән өрөп, ут тоҡандырып, өйөн йылытҡан..."

Баҡса үҫтерергә лә маһир икән Рөстәм. Теплицаһында үҫтергән ҡыярҙарҙы май айында уҡ ашай башлағандар. Яҙҙыртып алып, виноград, персик ултыртҡандар, икәү үҫтергән роза сәскәләре лә баҡсаның йәме икән.

Ә Фәнүзәнең бәйләгән бәйләмдәре - үҙе бер тема. Күҙле кеше лә ундай әйберҙәр бәйләй алмайҙыр. Кофта,

бәйләнмә күлдәк, ойоҡ-тәпешкәләр, ултырғыс түшәктәре, диван-кресло япмалары, башлыҡтар - иҫең китәрлек. Күңел нурын түгеп ижад иткән кейем-һалымдары - үҙе бер сәнғәт әҫәре. Бына тиғән әйберҙәр бәйләп, төрлө кимәлдәге күргәҙмәләрҙә ҡатнашып, призлы урындар яулап, бәйләгәнен һатып, ғаилә бюджетын арттырып та ултыра икән Фәнүзә.

Йыр-моңға ғашиҡ ҡыҙҙарына атаәсәһе синтезатор, музыкаль үҙәк тә алып биргән. Һау сағында сәхнәнән төшмәгән Фәнүзә хәҙер ғаилә ағзалары өсөн концерт ҡуя.

Бына ошондай һоҡланғыс шәхес, ҙур хәрефтән Кеше, һөйөп-һөйөлә белгән ҡатын, үҙ бәхете, ҡояш аҫтындағы урыны өсөн көрәшә белгән башҡорт ҡыҙы йәшәй Бөрйән төпкөлөндә. Уға, уның эштәренә, һөйләгән һүҙенә ҡарап, уны инвалид тип әйтергә тел әйләнмәй. Юҡ, инвалид түгел ул, ябай, беҙҙең кеүек ҡәҙимге кеше. Беҙҙең күптәребеҙ Фәнүзә һымаҡ була алмай. Бәғзе бер рухһыҙ йәштәребеҙ тормоштоң бәләкәй генә һынауҙары алдында бөгөлөп төшкәндә, башын элмәккә тыҡҡанда, хәмер һаҙлығына батҡанда, Фәнүзәнең йәшәү өсөн көрәшеүе - үҙе бер батырлыҡ, йәшәү өлгөһө.

Йәшәүҙән биҙеп, үҙҙәренә-үҙҙәре ҡул һалыусыларҙы өнәмәү генә түгел, аҡламай Фәнүзә: Аллаһ биргән һынау - донъяны нимә тип ташламаҡ кәрәк? Үҙ ғүмереңде үҙең ҡыйыу - көсһеҙлек, еңел аҡыллылыҡ билдәһе. Хәмдиә апайҙың да был тәңгәлдә хөкөмө ҡаты: "Бер мәл бер туған тейеш егет килеп инде, үҙе һуҡмыш, аҫылынып үләм, ти. Бына һиңә ҡағыҙ, күҙҙәремдә, аяғымды Фәнүзәгә бирәм, тип яҙ, унан теләһәң нимә эшлә, тинем. Бер килке аптырап шаңҡып торҙо теге, шунан яман уйынан дүнеп, ятып йоҡланы..."

Эйе, аҙмыш һынауҙарын үтә алмай һыңғандар, үҙҙәренә үҙҙәре Ғазраил булғандар аҙмы ни арабыҙҙа? Хәмдиә апай, Фәнүзә, Рөстәм кеүектәр бармаҡ менән һанарлыҡ. Шөкөр, шулай ҙа бар ундайҙар. Донъя ҡоттары, рух ҡалҡандары, өмөт усағын һүндермәй һаҡлаусылар. Усаҡ-ҡа йән өрөп, ут өҫтәп торһаң ғына яна. Нәҡ кеше күңеле кеүек. Күңел дә бит наҙға, күп осраҡта аяуға, һис юғында, аңлауға мохтаж.

Мәзитовтарҙың ғаиләһендә тормош әле ошо көйгә көйләнгән. Унда береһе хаҡына икенсеһенең йәне фиҙа ҡылыына. Ошонан тукыла ла инде бәхет. Ошонан мөхәббәт усағы ҡуҙлана, дөрләй. Ә был йортта һүнгән усаҡты терелтергә йән атып, Хоҙай бирмеш артыһын йәне-тәне менән яратып тороусы, тере ҡуҙҙы тере ҡуҙ менән йылытып йөрөүсе Рөстәм менән тотош ғүмере йәшәү өсөн көрәшкә әйләнгән оло йөрәкле, мөхәббәтле, һөймәлекле, сылтыр шишмә тауышлы, барлығы менән бөтә туғандарын ҡыуандырып ҡына тороусы Фәнүзә йәшәй. Яман күҙҙән, яман һүҙҙән Хоҙай һаҡлаһын уларҙы. Инә ҡоштай Хәмдиә апайға, ихтыяр көсөн туплай алған Йәүҙәт ағайға һаулыҡ насип итһен. Өмөт ҡуҙы, һөйөү усағы ғына һүнмәһен.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## "Ел һулышы". Башҡа сығанаҡтарҙың раҫлауы

**Күп йылдар үткәс, "ауырыу ел" тигән образлы атаманың Боронғо Вавилонда "йәшәүе" хаҡында уҡыным. Был дәүләттә йәшәүселәр ҡайһы бер ауырыуҙарҙы кешеләргә Иблистәрҙең ҡайнар ҡоро еле килтереүенә ышанған. Уларҙың бәғзеләренең килеп сығыуын эпидемиялар ҡотороуға, енәйәтселек һәм үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙар йышайыуға бәйләгәндәр.**

Иң киң билдәле елдәрҙең береһе - сирокко, унын йылы тынын ҡайһы бер Европа илдәре тоя. Һәр яҙ был ел Сахаранан һәм Ғәрәп (Аравия) ярымутрауынан килеп, Урта диңгеҙ аша көнбайышҡа Италияға һәм Испанияға юллана. Израиль халҡы уны шараф, мысырҙар - хамсин, тунистар - шили, мароккандар левеш тип атай. Иерусалимдағы Йәһүд университеты ғалимдары был тәбиғәт күренешен инде ярты быуат өйрәнә. Шуға күрә Яҡын Көнсығышта уның кеше психикаһына һәм физиологик торошона шактый йоғонтоһо яҡшы билдәле. Ҡайһы бер хөкөмдарҙар, әгәр көс ҡулланылған енәйәт ваҡытында шараф еле иҫеүе асыҡланһа, хөкөмдө йомшарталар. Әгәр ел үҙ юлын Израиль аша һала икән, табиптар ҡайһы бер ауырыуҙарҙың күпләп артыуын көтә.

"Ауырыу ел" нигеҙҙә өс төрлө ауырыу килтерә. Уның үлемесле тыны кешеләрҙә аңлатып булмаҫлыҡ биохимик реакция булдыра. Ҡайһы берәүҙәрҙең бәүелендә күңел торошон көйләүсе серотин миҡдары күтәрелә. Ғәҙәти торошта ул тәбиғи тынысландырыусы булып торһа, күпләп эшләнә башлаһа, кеше тиҙ ярһыусанға йәки йоҡосоға әйләнә. Икенселәр адреналин күп бүленеп сығыу арҡаһында даими арығанлыҡ тойғоһо кисерә. Был ошо гормонды эшләп сығарыусы биҙҙәрҙең туҙыуына килтерә. Өсөнсөләр ҡалҡан биҙендәге етешһеҙлектәр менән интегә.

"Сихырлы елдәр" башҡа илдәрҙә лә бар: Көньяҡ Африкала, Швейцарияла, Францияла, Америка Ҡушма Штаттарында һ.б.

## Өләсәйем тарихы: "йәй" ташы

Йәш сағымда мин һуғышсан атеист инем һәм бер ниндәй мөғжизәгә лә ышанманым. Әсе телле булдым һәм мин уны тәбиғәттең асылмаған серҙәренә ышанған кешеләрҙән көлөү өсөн оҫта файҙаландым. Әммә ололарҙы тыңлай инем, сөнки башҡорт ғаиләһендә, ниндәй генә социаль сығышлы булмаһын, ололарға ихтирамлы мөнәсәбәт һүҙһеҙ буйһонған ҡағиҙә булды. Әсәйем яғынан Бакмал өләсәйем боронғо риүәйәттәрҙе, ырым-ышаныуҙарҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы һаҡлаусы ине. Яҡты күҙҙә уның һөйләгәндәре көлкөлө һәм ысынбарлыҡҡа тап килмәгән кеүек тойолдо. Өҫтәүенә, Факи һәм Әхиәр ағайҙарым - өләсәйемдең улдары - һәр яҡлап мине шулай ҡотортто. Әммә уның ҡайһы бер һөйләгәндәрен төнөн ишеттем һәм уларҙы мәңгелеккә хәтеремә һалып ҡуйҙым. Кискеһен, барлыҡ ейән-ейәнсәрҙәрен йыйып, өләсәйем күптән булған ваҡиғаларҙы һөйләй торғайны. Тылсымлы таш ("йәй ташы") тураһындағы тарихты беренсе тапҡыр мин унан (Сирғәлина Бакмал Мансур ҡыҙы, 1898 - 1996) 40 йыл самаһы элек ишеттем. Шул ваҡытта уҡ өләсәйемдең был ваҡиғаны тыныс ҡына бәйән итә алмағанына һәм тыңлаусының йөҙөнә мыҫҡыллау сыҡҡанда ныҡ тулҡынланғанына иғтибар иттем. Ҡыҫҡаса тарихтың асылы бына шундай.

Бер ваҡыт өләсәйем (1918-ме, 1919-мы йылда) йылғаға һыуға бара. Ҙур булмаған Саҡмағош йылғаһында йәйғор төҫтәрендә балҡыған матур таш күрә. Ул тере йән кеүек, йылға ағымы ыңғайына йөҙә. Өләсәйем уны тотоп ала һәм өйгә алып ҡайта. Һеҙөмтәлә көслө дауыл башлана, һуңынан бер туҡтауһыҙ яуған ямғырҙар китә. Быңдай тәбиғәт ҡазаһын күреп хафаланған ололар бергә йыйылып, кемдеңдер һыуҙан "йәй ташы"н алғанлығы тураһында фараз белдерә. Таштың өләсәйемдә булғанлығын асыҡлағас, Темәс ауылында булған олоҫ башлығына хәбәр итәләр. Унан вәкил килеп, өләсәйемә ташты ҡабат йылғаға ташларға күрһәтмә бирә. Өләсәйем олатайым менән бергә йылғаға китә. Олатайым әйтеүенсә, өләсәйем ташты йылғаға ташлауы була, ул ҡапыл ҡоштай ҡуккә күтәрелә һәм күҙҙән юғала.

Өләсәйем бөтөнләй ят ерҙә иҫенә килә. Ул таныш булмаған ер буйлап атлай һәм бөтөн нәмәгә аптырап баға. Эргәһендәге һыуҙа йыуан-йыуан йыландар (өләсәйем әйтеүенсә, мискә йыуанлығы) күрә, улар уның тирәһендә йөрөй, әммә бер зыян да килтермәй. Тирә-яҡтағы тауҙарҙа ҙур ҡарағайҙар үҫеп ултыра, уларҙың аҫтында оҙон муйынлы йәнлектәр йөрөй (һунынан, ҡайһылыр ейәненең әлифбаһынан күреп, өләсәйем уларҙың жираф булыуын белә). Ошо уҡ ерлектә һыйырҙар, аттар йөрөй, ҡатын-ҡыҙҙар бейәләр һауа, эргәләрендә балалары уйнай. Ҡабат үҙенең Баймаҡ районының Сәйетбаттал ауылына нисек ҡайтҡанын өләсәйем иҫләмәй. Олатайым уны ниндәйҙер мунса артынан табып ала. Ул иҫтән яҙған була. Ерҙәге иҫәп буйынса өләсәйем теге донъяла өс көн була. Ә уның үҙенә был сәйәхәт теге донъя иҫәбе буйынса ни бары 15 минуттай ғына тойола.

Өләсәйем был тарихты теләгән кешегә һәр ваҡыт бәйән итте. Хатта унан асыҡтан-асыҡ көлгәндә лә һөйләр булды. Уны нимәләр бер үк тарихты 70 йыл буйы һөйләргә мәжбүр итте һәм ул һәр саҡ был осраҡты яңынан кисерҙе - тулҡынланды, борсолдо, өмөтһеҙләнеп, ҡулдарын һелтәне, ә йыландарҙың борғаланыуын тән хәрәкәттәре менән күрһәтергә тырышты. Һуңғы тапҡыр был тарихты өләсәйем миңә 15 йыл элек һөйләне һәм мин уны магнит таҫмаһына яҙҙырып алып ҡалғаныма ҡыуанам.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Камиллыҡҡа һигеҙ аҫҡыс

**Бишенсе аҫҡыс: үҙегеҙгә талаптар стандартын күтәрегеҙ һәм уға тап килергә тырышығыҙ.**

Көн һайын күнекмәләр эшләп, ихтыяр көсөн оҡшамаған йәки күңелегеҙгә ятмаған эштәрҙе башҡарыуға йүнәлтә алаһығыҙ. Уңышлы кешеләр уңышһыҙ кешеләр башҡарырға теләмәгән күп нәмәләрҙе аткара. Үҙегеҙ ҡурҡҡан эшкә тотоноғоҙ һәм ҡурҡыу хисенең нисек итеп һабын ҡыуығы кеүек шартлап юҡҡа сығыуын тойорһоғоҙ - был ҡурҡыу башҡаса һеҙҙе борсомаҫ.

Ниндәйҙер ҙур проектҡа тотонор алдынан күңелегеҙгә шик оялай башлаһа, уны шунда уҡ ҡыуып сығарығыҙ, эште ваҡытында тамамлауға иғтибар йүнәлтегеҙ.

Ғүмер юлығыҙҙа һеҙҙе туктатҡан, ҡаушатҡан көсһеҙлек үҙен һиҙҙерә башлау менән уны еңеп сығырға тырышығыҙ. Шуның менән хыялығыҙға табан тағы бер аҙым яһайһығыҙ. Үҙегеҙҙе көсөргәнештә тотҡанда һәр саҡ мускулдарығыҙҙы ла күнекмә ваҡытында көсөргәнештә тотҡан кеүек көсәндерәһегеҙ һәм ныҡлыраҡ, көслөрәк була бараһығыҙ.

Үҙ стандарттарығыҙҙы даими күтәреп барыу мөһим - үҙ эшенең оҫтаһы гелән шулай эшләй. Эшмәкәрлектең ниндәй генә төрө булмаһын, "тигеҙлеккә сығыу" осоро була. Әгәр бөтөн нәмә еңел һәм бер ауырлыҡһыҙ башҡарыла икән, тимәк, һеҙ ошо торошҡа еткәнһегеҙ. Тормош күңелһеҙ һәм ялҡытҡыс була башлай. "Тигеҙлек"тә оҙаҡ тотҡарланмағыҙ. Артабан үҫеү һәм сәскә атыу өсөн алдығыҙға йондоҙҙар кимәлендәге маҡсаттар ҡуйығыҙ. Һәр көн аҙға ғына булһа ла яҡшыраҡ булырға тырышығыҙ, иң яҡшынан башҡа нәмәгә ризалыҡ бирмәгеҙ. Тап ошонда һеҙҙең булмышығыҙ, асылығыҙ сағыла ла инде, уны эшкә егегеҙ.

**Алтынсы аҫҡыс: уҡытыусыларҙың да уҡытыусыһы бар.**

Һәр ваҡыт асыҡ булығыҙ. Ни тиклем тәртипле булһағыҙ ҙа, уныш ҡаҙанһағыҙ ҙа, шуны онотмағыҙ: хатта гиганттарҙың да уҡытыусылары була. Был планетала нимәгәлер өйрәнә, яҡшыраҡ була һәм яҡшы тормош башлай алмаған бер кем дә юҡ.

Яңы матур мөмкинлектәр һәм идеялар алдында аҡылығыҙҙы ябып ҡуйһағыҙ, һеҙ шунда уҡ камиллыҡҡа юлығыҙҙы ябасаҡһығыҙ һәм алдығыҙға ҡуйған маҡсаттарығыҙға өлгәшеүе ауырыраҡ буласаҡ. Үҙегеҙҙә баҫалҡылыҡ булдырығыҙ һәм ҡаршығыҙға осраған теләһә кемдән дә нимәгәлер өйрәнергә мөмкин икәнлеген онотмағыҙ. Һеҙ көн һайын аралашҡан теләһә кем теге йәки был өлкәлә белгес, уҡытыусы булыуы мөмкин. Улар һеҙгә нимә әйтә ала, шуға ҡолаҡ һалығыҙ, белемгә аңығыҙҙы асығыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 26 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Дорога в пустоту", 9-я и 10-я серии (16+)
23.25 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (16+)
01.00 Ночные новости
01.20, 03.05 "Разрисованная вуаль". Драма
03.00 Новости
03.45 "Связь" (12+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
